*Ризван ХАЖИЕВ*

# Архитектор юлы

## (Документаль повестан өҙөк)

### Оло юлға илткән һуҡмаҡтар


*Барый Кәлимуллин*

— Борон башҡорт ауылдарында архитектор булыу түгел, архитектураның нимә икәнлеген дә күҙ алдына килтермәгәндәр. Һеҙ, төпкөл ауылдан сыҡҡан малай, ул һөнәргә нисек барып юлыҡтығыҙ?

Ошондай һорау менән мөрәжәғәт иткәйнем мин байтаҡ йылдар элек исеме киң билдәле архитектор Барый Кәлимуллинға. Беҙ уның менән Менделеев урамындағы Өфө нефть институтының архитектура кафедраһында ултырабыҙ. Һирәк сал сәстәрен шыма итеп артҡа тараған, уйсан, хатта бер аҙ ҡырыҫ йөҙөн тәрән бураҙналы йыйырсыҡтар баҫҡан, бизмәндәй тос ҡулдары менән өҫтәлдә ятҡан ҡағыҙҙарҙы һаҡ ҡына аҡтарыуы, ҡара тирәсле ҙур күҙлеген маңлайына мендереп ҡуйып, баҫалҡы ғына йылмайыуы менән ул, нисектер, колхоз бухгалтерын да хәтерләтә. Тик эргәһендә счет төймәләре генә юҡ.

— Миңә лә ул профессия ете ятып бер төшөмә инмәй торғайны, — тип, еңелсә генә йылмайҙы Барый ағай һәм, башын бер аҙ ҡалҡыта биреп, тәҙрә аша яҡындағы ҡарағай урманына, урамды геүләтеп үткән машиналар ағымына, ҡайҙалыр мәңге ашығыусы кешеләр төркөмөнә күҙ йүгертеп сыҡты. Әйтерһең, улар үтәләй күк томандар артында тороп ҡалған йәшлеген, егерменсе йылдарҙың тынғыһыҙ комсомолецтарын күреп ҡалды. — Егерменсе йылдар урталарында мин Иҫке Хәлил ауыл советы башҡарма комитеты секретары инем, бер үк ваҡытта тәүге комсомол ойошмаһын да етәкләнем. Насар эшләмәгәнмендер инде, бер көн кантон үҙәге Мәсәғүт ауылына саҡырҙылар ҙа, кантондың Ер эштәре идаралығы секретары итеп тәғәйенләнеләр. Бер ай ҙа үтмәне, мине — комсомол ойошмаһы йыйылышы рәйесе, ә урындағы комсомол вожағы, кантком секретары Степан Кузичты йыйылыштың секретары итеп һайланылар. Йүнләп русса ла белмәгән башҡорт егете урыҫ йәштәре алдында рәйеслек итһен әле! Мин уның әрәсәһенә аҙаҡ ҡына төшөндөм: бәхтиһән, шундай юл менән алсаҡ йөҙлө, асыҡ күңелле Степан мине йәмәғәт эшенә йәлеп итергә тырышҡан икән. Рәхмәт уға! Мин, ысынлап та, комсомол эшенә тартылдым. Тиҙҙән мине татар һәм башҡорт йәштәре араһында эшләү буйынса ВЛКСМ-дың кантком инструкторы итеп ҡуйҙылар. Ҡыҙыл армияла өс айлыҡ әҙерлек курстары үткәс, мин йәнә Мәсәғүткә ҡайттым һәм йылдан ашыуыраҡ кантон башҡарма комитеты секретары вазифаһын үтәнем, президиум ағзаһы булдым.

...1927 йылдың майында була был хәл. Степан Кузичтың тәҡдиме менән кантон комсомол ойошмаһының өс етәксеһе — Семен Турышев, Исхаҡ Фазылов һәм Барый Кәлимуллин Башҡортостанда беренсе булып һыу туризмына башланғыс һала һәм кәмә менән Әй, Ҡариҙел йылғалары буйлап Өфөгә сәйәхәткә сыға. Һигеҙенсе тәүлектә егеттәр баш ҡала пристаненә килеп туҡтай. Ул турала «Красная Башкирия» гәзите хәбәрсеһе Петр Ковалевский «Һыу буйлап 1000 саҡырым» тигән мәҡәлә лә баҫтыра.

— Комсомолдың кантон комитеты 1930 йылда мине Өфөгә, халыҡ мәғарифы институты эргәһендәге юғары уҡыу йорттарына инеү өсөн ҡыҫҡа сроклы әҙерлек курсына ебәрҙе, — тип хәтер eптәрен тағата артабан Барый Ғибәт улы. — Уны тамамлағас, ҡулға Томск технология институтына инергә путевка тотторҙолар. Мин был ваҡытта өйләнергә өлгөргәйнем. Өфө фельдшер-акушерлыҡ училищеһын тамамлап, Мәсәғүт кантонына эшкә ебәрелгән Бүздәк ҡыҙы Ямал Бикмөхәмәтова ине ул һәм, минең ай-вайыма ҡарамай, ул да алыҫ Себергә барырға юлға сыҡты.

Күреп белеү түгел, быға тиклем исемен дә яҙа-йоҙа ғына ишетеп ҡалған ҡала бигүк йылы ҡаршыламай йәштәрҙе. Поездан төшөп, ҡараңғы һәм бысраҡ вокзал аша майҙанға сығыу менән, ҡулдарына фанер сумаҙан тотҡан, арҡаларына биштәр аҫҡан ирле-ҡатынлы Кәлимуллиндарҙы бишалты извозчик уратып та ала.

— Әйҙәгеҙ минең кырандасҡа, күп һорамайым, — ти береһе.

— Минең атым йылғыр, «һә» тигәнсе теләгән урынығыҙға алып барып еткерер, — ти икенсеһе.

Ҡайһы извозчикка ултырырға белмәй торғанда, буй-һынға башҡаларҙан бер башҡа ҡалҡыуыраҡ, көс-ҡеүәте һаҡал-мыйыҡ баҫҡан йөҙөнә сыҡҡан урта йәштәрҙәге ир алғараҡ үтте лә:

— Тыңлама һин уларҙы, ҡаты морондарҙы, — тип Барыйға татарсалап өндәште. — Кәрәк урынға үҙем алып барам. — Ул Ямал ҡулындағы сумаҙанды эләктереп, өҫтө япмалы кырандастың артына һалып бәйләп тә ҡуйҙы. — Әйҙә, ултырығыҙ! Ҡайҙа барырға бойораһығыҙ? — Үҙен Йәғәфәр тип таныштырған күсер, кузлаға ултырып, дилбегәһен ҡулына алды.

— Технология институтына, — тип яуапланы Барый, был кешенең татар телен боҙоборак һөйләшеүенә иғтибар итеп. Түҙмәне, һорай һалды: — Ҡарале, Йәғәфәр ағай, үҙең татармын тинең, үҙең татарса ҡаты һөйләшәһең. Ҡаҙаҡ түгелһеңдер бит.

— Мин бит, энекәш, себер татары — Күсем хандың алыҫ ҡәрҙәше, — тип көлөп ебәрҙе Йәғәфәр. — Ә һеҙ ҡайҙан?

— Башҡортостандан. Бындағы технология институтына уҡырға ебәрҙеләр.

— Улай икән, — тип һуҙҙы күсер, — тимәк, уҡырға. Тик ҡайҙа йәшәрһегеҙ? Ул уҡыу йортоноң дөйөм ятағы ла юҡ бит.

— Ысынлапмы? — Барый һағая төштө, күңеле кителде. — Беҙгә бит ятағы бар тип әйткәйнеләр ҙәбаһа.

— Бар ине шул, тик йәй башында янғын сыҡты. — Йәғәфәр, атын үҙ яйына ҡуйып, нимә тураһындалыр уйланды. — Бына нимә, энекәш, — тине ул бер аҙҙан, артына боролоп. — Хәҙер мин танышым аша һеҙҙе ҡунаҡханаға урынлаштырам. Берәй аҙнанан килеп алырмын. Минең үҙ йортом бар, әлегә унда ремонт бара. Өйөм институтҡа йыраҡ түгел, бер квартал аша ғына.

— Рәхмәт, ағай. — Барыйҙың ҡарағусҡыл йөҙө яҡтырып, балҡып китте. — Әгәр башҡа сара ҡалмаһа, һис һүҙһеҙ, һеҙгә барасаҡбыҙ.

— Килештек. Бына, килеп тә еттек. Тр-р-р, малҡай! — Йыуан ҡарағайҙарҙан һалынған ике ҡатлы шәхси ҡунаҡхананың хужаһы менән һөйләшеп, йәштәрҙе ҡалдырҙы ла, Йәғәфәр йәнә пассажирҙар эҙләп атын ҡыуҙы.

Бер аҙна тигәндә Йәғәфәр йәнә килеп, Кәлимуллиндарҙы өйөнә алып ҡайтып, һыңар тәҙрәле тар ғына бүлмәһенә урынлаштырҙы.

Уҡыуҙар сентябрҙә башланырға тейеш булһа ла, архитектура факультетының беренсе курс студенттарын ҡышҡа утын әҙерләргә тайгаға ебәрҙеләр һәм унда улар айға яҡын яттылар.

Себер киңлектәрендә урынлашҡан Томск ҡалаһы үҙенең архитектура ҡомартҡылары, уҡыу йорттарының күплеге менән таң ҡалдырҙы Барыйҙы. Һис тә тайга уртаһында юғалып ҡалған тип әйтмәҫһең уны: университеты, медицина һәм технология институттары, техникумдары бар. Бында Сергей Киров та уҡырға килгән икән һәм 1905 йылғы революция ваҡытында батша самодержавиеһына ҡаршы сығыштарҙа актив ҡатнашҡан, хатта ҡоралды демонстрациялар менән етәкселек иткән, тип һөйләнеләр. Илдең төрлө мөйөштәренән йыйылған студенттар араһында, Барый һымаҡ, ғаиләлеләр ҙә байтаҡ, шуға фатир мәсьәләһе бик киҫкен тора. Ярай, Кәлимуллиндарға себер татары Йәғәфәр осрап, ул мәсьәлә тиҙ хәл ителде, ә күпме студенттар фатир эҙләп ыҙа сигә. Торор мөйөштәре булмаған студенттарҙың ҡайһы берҙәре кире ҡайтып та китте.

Ҡыш башланды. Уның менән һалҡындар ҙа оҙаҡ көттөрмәне. Әммә бындағы һыуыҡты Урал тәбиғәте менән сағыштырырлыҡ түгел — 30—35 градус һалҡындар ғәҙәти хәл, айырым көндәрҙә хатта 50 градусҡа барып етә. Түҙ генә. Сатнама селләләрҙә ағастар шартлап ярыла, осар ҡоштар туңып ергә ҡолап төшә, ҡалалағы барлы-юҡлы машиналар йөрөүҙән туҡтай. Бындай көндәрҙә студенттар иртәнән кискә тиклем институттан урамға ла сыҡмай, шунда уҡый, шунда туҡлана. Өйгә бирелгән эштәрен дә бригада методы менән бергәләп үтәйҙәр. Сөнки бөтәһе лә уңайлы бында: бай техник китапхана, яҙыу-һыҙыу өсөн кәрәкле инструменттар менән йыһазландырылған чертеж залдары ла үҙенә тарта. Уҡыуҙың бригада методы ул йылдар студенттары өсөн бигерәк тә отошло булған. Студенттар араһында йәше лә, йәше сығып барғаны ла, олоһо ла бар, белем кимәле лә бер тигеҙ түгел. Берәүҙәр партия, совет эшендә шымарып, армияла хеҙмәт итеп һәм башланғыс белем менән генә әҙерлек курстарын үтеп, путевка менән килеп, институтҡа имтиханһыҙ ғына инһә, икенселәр урта белемле. Уларға алгебра һәм геометрия, физика һәм химия кеүек предметтар яҡшы таныш. Шуға ла йәштәр «ҡарттар»ҙы «буксир»ға ала, теүәл фәндәрҙе үҙләштерергә ярҙам итә.

Студент тормошо бер ваҡытта ла еңел бирелгәне юҡ. Утыҙынсы йылдарҙа икеләтә-өсләтә ауырға тура килгән. Аудиторияларҙа уҡытыусыларҙың лекцияларын тыңлау, ҡолаҡҡа кергәндәрен конспектҡа теркәп барыу, семинарҙарға, практик дәрестәргә, коллоквиумдарға әҙерләнеү бер хәл, ә бына йәшәү шарты, ашау-эсеү, кейем-һалым хәстәрләү — бөтөнләй икенсе күренеш. Етмәһә, килгәндең икенсе йылында Кәлимуллиндарҙың улы Фуат тыуа. Айына 59 һум стипендияға өс тамаҡты аҫрау тағы ла ауырлаша. Бер ҡайҙан да ярҙам көтөү, кемгәлер күҙ төртөп барыу мөмкин түгел. Бөтә ышаныс һәм өмөт тик үҙеңдә генә. Шулай ҙа ҡарап тороуға йыуаш,

баҫалҡы Барый ауырлыҡтар алдында юғалып ҡалмай: Томск урамдарының береһендә төҙөлөп ятҡан 42 фатирлы йортҡа техник булып эшкә яллана һәм лекцияларҙан сығыу менән шунда йүгерә.

Осон-осҡа ялғап йәшәй торғас, өс курс та үтеп китә. Дүртенсе курс башланыр алдынан уларҙың факультетын Новосибирскиға күсерәләр һәм инженер-төҙөлөш институтына ҡушалар. Ләкин уҡыу аудиториялары тулы бер факультетты һыйҙыра алмай һәм занятиелар ике-өс айға кисектерелә. Барыйға шул ғына кәрәк: ул эш эҙләп Кемеровоға китә лә, ундағы ремонт-төҙөлөш участкаһына прораб булып урынлаша. Ике айҙан һуң кеҫәһен мул ғына итеп ҡалынайтып институтҡа ҡайта. Йәйге каникул ваҡытында буласаҡ архитекторҙар, башҡа студенттар кеүек, ялға түгел, ә төрлө төҙөлөш объекттарына производство практикаһына тарала. Тәүге практикаһын Барый Томск үҙәгендә тимер юлсыларҙың биш ҡатлы һәм 100 фатирлы торлаҡ йортон һалыуҙа үткәрә, участка начальнигы, ҡарт төҙөүсе-инженер Павел Климачевтан төҙөлөш серҙәренә өйрәнә. Йәнә бер курсты тамамлағас, БАССР Коммуналь хужалығы министрлығына ҡараған «Башпроект» тресы етәкселәре Башҡортостанға саҡыртып ала һәм төҙөлә башлаған Йоматау шифаханаһына тариф-нормировка бюроһы начальнигы итеп ебәрә. Көн һайын ул ике ярҙамсыһы менән ер ҡаҙыусылар, балта оҫталары, ташсылар, бетонсылар, малярҙар, тимерселәрҙең эштәрен ҡабул итергә, дөрөҫ баһаларға, шуға ҡарап эш хаҡын билдәләргә тейеш. Төҙөлөш барышы һәм бригадалар араһындағы социалистик ярыш махсус витринала яҡтыртып барыла. Иң яҡшы бригада йәнәшәһенә самолет рәсеме төшөрөлә. Унан ҡала автомашина, һыбайлы һүрәте, артта һөйрәлеүсе бригада тураһына тәлмәрйен һүрәтен эшләп ҡуялар.

— Ҡайһы ахмаҡ шифахана өсөн был урынды һайланы? — тине Барый бер көн Ленинградтан тороп ҡына шифахананың типовой проектын эшләгән һәм төҙөлөш барышын күҙәтергә килгән архитектор Денискоға иртәнге оператив кәңәшмә ваҡытында.

Төҙөлөш етәкселәре, мастерҙар, прорабтар менән артыҡ иҫәпләшеп бармаған, үҙен тәкәббер тотҡан һәм тейешле-тейешһеҙгә ҡыҫылып йөрөгән Дениско күҙлеген һөртөп кейҙе лә:

— Нимәһе оҡшамай һиңә, голубчик? — тип һораны.

— Беренсенән, эргәнән генә тимер юлы үтә. Паровоздарҙың һуҙып ҡысҡыртыуы, вагон тәгәрмәстәренең рельс баштарына бәрелеп шаҡылдауы бында ял итеүселәргә һис тә Чайковский музыкаһы булып яңғырамаҫ. Икенсенән, беренсе һәм икенсе корпустарҙы проектлағанда уҡ байтаҡ хаталарға юл ҡуйылған, улар — архитектор хаталары...

Ләкин Ленинград архитекторы уны тыңлап бөтөрмәне.

— Һин кем әле миңә аҡыл бирергә? — тип, кинәт кенә ҡыҙҙы ла китте. — Архитектурала әлепте таяҡ тип белмәгән көйөңә теге, йомортҡа һымаҡ, тауыҡты өйрәтмәксеһеңме? Молокосос!

— Мин — Новосибирск инженер-төҙөлөш институтының архитектура факультеты студенты, — Кәлимуллин да бирешергә теләмәне. — Республика етәкселәренең саҡырыуы буйынса производство практикаһын үтергә ҡайттым. Институтта Ленинград архитектура мәктәбенең дә эш стилен, йүнәлешен өйрәтәләр. Башҡа мәктәптәрҙән әллә ни алдым ерегеҙ юҡ, коллега! Проектты әҙерләү алдынан уның урынын һайларға, тәбиғәт шарттарын, рельефты белергә кәрәк ине, әммә һеҙ

«минән киткәнсе — эйәһенә еткәнсе» принцибы менән проектығыҙҙы ошо таулы-ташлы ергә килтереп һөйәгәнһегеҙ.

— Етте! — Дениско итләс устары менән өҫтәлгә шап иттереп һуҡты. — Үҙемдән көлдөртөргә не позволю!

— Барый Ғибәтович, — төҙөлөш начальнигы яньялды туҡтатырға ашыҡты. — Шифахананың урыны уңышһыҙ икәнлеген беҙ ҙә беләбеҙ, ләкин Мәскәү ҡушҡас, ни хәл итмәк кәрәк? Ә хәҙер һуң, төҙөлөш көндән-көн ҡыҙа бара. Проекттағы кәмселектәргә килгәндә, әйҙәгеҙ, бергәләп төҙәтәйек.

Ләкин Ленинград архитекторы үҙ хатаһын танырға, уны төҙәтергә теләмәне. Кәңәшмәнән һуң, әйберҙәрен юл сумаҙанына тултырҙы ла, станцияға төшөп китте. Дениско проектындағы кәмселектәрҙе күмәкләп бөтөрөп, эштәр бер аҙ яйланғас, Барый ҙа Новосибирскиға уҡыуын дауам итергә юлға сыға.

Ленинградтың «бүрәнә аша бүре күреп», шаблонға ҡоролған типовой проекттар «һуғыусы» һәм уларҙы бөтөн илгә таратыусы архитекторҙары менән көрәштең башы ғына ине был. Уны яҡшы аңлай Барый һәм уҡыуға сат йәбешә. Бер генә лекцияны, бер генә практик дәресте, семинарҙы ҡалдырмай. Диплом алды практикаһына ла ул Өфөгә ҡайта һәм ҡала коммуналь хужалығында инженер вазифаһын үтәй башлай. Ҡарт большевиктар йортон (Коммунистик урамындағы 75-се йорт), Ленин урамындағы 2-се һанлы белгестәр йортон төҙөүҙә архитектура-техник яҡтан етәкселек итеү бурысы ҡуйыла был юлы уның алдына.

Өс корпуслы был йорт архитекторҙар А.И.Филонов һәм Г.Д.Вагин тарафынан проектланып, 1931 йылда һалына башлай, ләкин проекттағы хаталар арҡаһында төҙөлөш туҡтатыла. Уның Ленин урамына ҡараған 1-се корпусы 1936 йылда файҙаланыуға тапшырыла, ә Совет урамына сыҡҡан 3-сө корпус, архитектор Плеханов тарафынан яңынан проектланып, 1942 йылда ғына, ниһайәт, һалынып бөтә. Ә быға тиклем партия өлкә комитетының ҡушыуы буйынса корпустарҙың проекттарын тағы ла бер нисә тапҡыр ентекләп тикшерә Барый һәм ундағы «хата»ларҙың тикмәгә генә түгеллеген аңлап ҡала. Башҡортостандың баш ҡалаһын төҙөү һәм төҙөкләндереүгә «Башпроект» тресына оялап алған бер төркөм элекке дворяндар, йә уларҙың юғары архитектура белемле балалары аяҡ салаһын һиҙенһә лә Барый, башырырға органдарға йүгермәй, аҫтыртын «хата»ларын үҙе төҙәтә һәм яңыртылған проектты яҡлау өсөн Мәскәүгә, РСФСР Коммуналь хужалығы халыҡ комиссариатына командировка ала. Дворян архитекторҙар шыр ебәрә, бер аҙға тынып ҡала, май урлап тотолған бесәй һымаҡ, ҡойроҡтарын болғай-болғай йәш архитектор тирәһендә бөтөрөлә. Барыйҙың төплө белемле архитектор ғына түгел, бәлки етди һәм ышаныслы кеше, оҫта етәксе икәнлеген дә, ниһайәт, танырға мәжбүр булалар.

Мәскәүҙә Кәлимуллин үҙгәртелгән проектты яҡлап ҡына ҡалмай, ә Төҙөлөш банкыһынан өҫтәмә ассигнованиелар, дефицитлы йыһазлау һәм сантехник материалдар өсөн лимит та юллап ала.

## Мин — архитектор

— Ә-ә, ҡайттыңмы, Барый Ғибәтович!? — Башҡортостан өлкә партия комитетының беренсе секретары Яков Борисович Быкин үҙе ҡабул итте әле генә Новосибирск инженер-төҙөлөш институтын та-

мамлап ҡайтҡан Барыйҙы. — Һине бит институтта уҡытырға ҡалдырмаҡсылар ине. Ярай, ректорға хат яҙып, телефондан һөйләшеп, көскә алып ҡалдыҡ. Бында мөһабәт төҙөлөштәр көтә һине. Мәскәүҙең ҡайһы бер түрәләре Башҡортостан, йәнәһе, аграр республика тип, беҙҙең хоҡуҡтарыбыҙҙы сикләргә маташһа ла, гел генә уларса булмаясаҡ. Үҙең беләһең, Ишембайҙа нефть табылыу республика өсөн оло ваҡиғаға әйләнде һәм Башҡортостанды, башҡорттарҙы артабан да таларға әҙер асарбаҡтарҙың ауыҙын япты. Шулаймы, иптәштәр? — Ул түрҙәге өҫтәл артында йылмайып ултырған ВКП(б) өлкә комитетының 2-се секретары Әхмәт Иҫәнсурин менән Башҡорт АССР-ы Үҙәк Башҡарма Комитеты рәйесе, яҙыусы Афзал Таһировҡа боролоп ҡараны.

— Хәҙер беҙгә промышленносты үҫтерергә, нефть менән бәйле яңы производстволар, яңы заводтар, яңы ҡалалар һалырға кәрәк, — тип күтәреп алды уны Афзал Таһиров.

— Әйткәндәй, — әңгәмәгә Әхмәт Иҫәнсурин да ҡушылды, — Афзал Мөхөтдиновичтың былтыр Ишембай нефтселәре тураһында «Машиналар ҡаны» тигән повесы баҫылып сыҡты. Уҡыманыңмы?

— Өлгөрмәнем әле. — Барый баҫалҡы ғына яуап бирҙе.

— Али Карнайҙың да нефтселәргә арналған «Ишембай», «Инженер Никольский» исемле әҫәрҙәре бар. — Яков Борисович, ҡулдарын френч кеҫәһенә тығып, кабинет буйлап арлы-бирле йөрөп алды ла йәнә Барый алдына килеп баҫты.

— Һиңә, Барый Ғибәтович, был әҫәрҙәрҙе уҡып сығырға кәрәк. Ишембай әлегесә эшселәр ҡасабаһы булып ҡына ҡалмаясаҡ, ҡалаға, тәүге башҡорт ҡалаһына әйләнәсәк, һәм уның генераль планын да тик башҡорт архитекторы эшләргә тейеш. Аңланыңмы мине?

Йәһүд милләтенән булһа ла, Быкин башҡорттарҙы үҙ итә ине, уларҙы уҡытырға, кеше итергә, тиңдәр араһында тиң, үҙ республикаһында үҙе хужа булырға өйрәтте, юғары вазифаларға ла уларҙы үрләтергә барлыҡ көсөн һалды.

...Пинжәк яғаһына күлдәк яғаһын сығарып кейгән, буйға тартыла башлаһа ла, ҡаҡса тәненә ит ҡунып өлгөрмәгән, ябығыраҡ сырайлы, ас яңаҡлы егет, ҡулына юл сумаҙанын тотоп, трест директоры Ершовҡа килеп керҙе.

Йыуан ҡорһағы менән өҫтәл артына һыймай ултырған, пеләш башлы, йәше менән алтмышты уҙған Ершов бынан ике йыл элек Ленинградтан эшкә саҡырылғайны. «Башпрогор»ҙың баш архитекторы Николай Юрьевич Лермонтов менән борсаҡтары бик «бешеп» етмәһә лә, Коммуналь хужалыҡ комиссариатындағы түрәләргә үҙенең йылғырлығы, татлы теле менән тиҙ яраны ул.

— Ғәжәп, бер «уд»ы ла юҡ был башҡорт малайының, — тип мығырланы директор, Кәлимуллиндың дипломын ҡарап сыҡҡас, — улар ҙа уҡырға белә икән дә. Ғәжәп! — Ул башын күтәреп Барыйға ҡаш аҫтынан күҙ йүгертте. — Тимәк, уҡыу ударнигы булдым, тиһең?

— Эйе. — Барый ҡыҫҡа ғына яуап бирҙе. — Бынан тыш, төркөмдә староста ла инем.

— Ярай-ярай, — тип һуҙҙы Ершов, өҫтәлдә йыуан, ҡыҫҡа бармаҡтарын бейетеп алғас. — Буш вакансиялар юҡ бит әле. Ваҡытлыса чертежник итеп алам, аҙаҡ күҙ күрер.

— Мине архитекторлыҡҡа уҡыттылар. — Барый түш кесәһенән Быкин биргән яҙыуҙы сығарып Ершов алдына һалды.

— Күптән шулай тип әйтәләр уны. — Директорҙың ҡырыҫлығы, тупаҫлығы ҡул менән алып ташлағандай булды. — Хәҙер үк һеҙҙе архитектор итеп тәғәйенләү тураһында приказ яҙам. Фатир мәсьәләһен дә хәстәрләрбеҙ, — тип, Барыйҙың бер алдына, бер артына сығып юрғалаһа ла, эстән генә уйланды: «Ҡарап ҡарарбыҙ, ниндәй мал сығыр икән һинән?»

«Башпрогор»ҙа эш башлауына бер ай тирәһе үттеме-юҡмы, Ершов Кәлимуллинды һынамаҡҡа Өфө моторҙар эшләү заводының эшселәр ҡасабаһын планлаштырыу һәм төҙөү проектын әҙерләргә ҡуша. Былдай проектҡа бер генә архитекторҙың көсө етмәҫен директор яҡшы белә. Уның өсөн архитектор, инженер-конструктор, геодезист, сантехник, чертежник һәм башҡа бер нисә төр белгесте үҙ эсенә алған тулы бригада кәрәк. «Әгәр алып барып сығара алмаһа, — тип, ҡулдарын ыуып уйлай Ершов, — «профессиональ яҡтан яраҡһыҙ» тигән «кәзә билетын» тотторабыҙ ҙа, шуның менән хуш-хәйрүш. Әгәр башҡарып сығарырҙай булһа, эш аҙағында башҡа белгестәрҙе лә йәлеп итеп, бригада төҙөрбөҙ, «коллектив хеҙмәтенең емеше», тип хәбәр һалырбыҙ, обком алдында маҡталырбыҙ. Әммә уй-хыялдары аҡланмай хөсөт директорҙың. Уҡыу программаһы буйынса «Ҡасабаларҙы төҙөүҙе планлаштырыу» предметына ун сәғәт кенә бүленһә лә институтта, Барый юғалып ҡалмай, конспекттарын яңынан ҡарап сыға, архитектура һәм төҙөлөш буйынса журналдарҙы аҡтара, күренекле архитекторҙарҙың ҡала һәм ҡасабаларға бәйле хеҙмәттәрен өйрәнә, ҡасабалар һалынасаҡ майҙандарҙы барып ҡарай, үлсәүҙәр, тикшереүҙәр үткәрә. Йәш архитекторҙың баҙап ҡалмауын, эшкә сат йәбешеүен күреп, Ершов та йомшара, уға белгестәр беркетә. Оҙаҡламай моторҙар эшләү заводы өсөн Черниковка ауылы эргәһендә төҙөләсәк һәм шартлы рәүештә Көнсығыш, Көньяҡ, Төньяҡ тип аталған ҡасабалар проекты Коммуналь хужалыҡ комиссариатында раҫланып, төҙөлөш эштәре башлана. Уның артынса Барый Кәлимуллинға Карл Маркс урамында паровоздар ремонтлау заводы клубын проектлау эше тапшырыла. Уны ла намыҫ менән башҡарып сыға йәш архитектор. Ә инде Еңел сәнәғәт комиссариатының етәксе кадрҙарҙың белемен күтәреү факультеты бинаһы проектын ул Григорий Вагин менән бергә эшләй. Уны һалыу ҙа оҙаҡҡа тартылмай. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында унда Мәскәүҙән эвакуацияланған Мечников исемендәге вакциналар һәм сывороткалар ғилми-тикшеренеү институты урынлаша. Бөгөн ул бинаны Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының филология факультеты биләй.

Утыҙынсы йылдарҙа Башҡортостан һәм уның баш ҡалаһы Өфө ҙур төҙөлөш майҙанына әйләнә. Өфө һәм республика ҡалалары үҫкән һайын торлаҡ йорттар, дәүләт һәм йәмәғәт бина元ары, уҡыу һәм мәҙәниәт йорттарын проектлау һәм төҙөүгә лә талапсанлыҡ арта. Әҙерләнгән проекттарҙың сифатын күтәреү өсөн уларҙы күмәкләп коллективта тикшерергә, өҫтәмәләр һәм төҙәтмәләр индерергә кәрәк. Икенсенән, проект ойошмаларына яңы ғына институт тамамлаған тәжрибәһеҙ йәш архитекторҙар килә. Уларҙың ташып торған энергияһын оло архитекторҙарҙың бай тәжрибәһе менән ҡушыу һәм дөрөҫ йүнәлеш биреү, шулай уҡ

архитекторҙың йәмғиәттәге ролен арттырыу, заман архитектураһы, ҡала һәм ауыл төҙөлөшө практикаһында ыңғай традицияларҙы артабан үҫтереү һәм новаторлыҡ ынтылыштарын яҡлау маҡсатында 1932 йылда СССР Архитекторҙар союзы ойошторола. Яңы союздың Уставын ҡабул итеү, идараһын һайлау өсөн съезд саҡырырға кәрәк була һәм уға әҙерлек барышында республика, край, өлкәләрҙә бүлексәләр төҙөлә. Ошондай эш Башҡортостанда ла башлана, ләкин Мәғариф халыҡ комиссариаты уны теркәүҙән баш тарта. Эш туҡталып ҡала. Яңы ғына Новосибирскиҙан ҡайтҡан Барый Кәлимуллин, башҡа йәш архитекторҙар уны йәнә ҡуҙғатып ебәрә һәм ярҙам һорап СССР Архитекторҙар союзының ойоштороу комитетына, Башҡорт АССР-ы Халыҡ Комиссарҙары Советына хат менән мөрәжәғәт итә. 1935 йылдың 29 июнендә БашЦИК Президиумы СССР Архитекторҙар союзының Башҡортостан бүлексәһен ойоштороу идеяһын хуплай һәм Наркомпросҡа уны теркәргә ҡуша.

1935 йылдың һалҡын декабрь көндәренең береһендә Өфөнөң Социалистик (хәҙер — Мостай Кәрим урамы) урамындағы Уҡытыусылар йортонда Архитекторҙар союзы бүлексәһенең тәүге ойоштороу конференцияһы асыла. Уның эшендә 60-ҡа яҡын архитектор, төҙөлөш инженерҙары, конструкторҙар ҡатнаша. Республикала Яҙыусылар (1934, март) һәм Рәссамдар (1934, июль) союздарынан ҡала өсөнсө булып ойошторолған ижади союздың идара составына архитекторҙар Г.Вагин, П.Гончаров, Б.Кәлимуллин, Коньков, Н.Лермонтов, Л.Лестряков, А.Филонов, төҙөлөш инженерҙары М.Грачев, А.Смелый, В.Чаплиц, Өфө ҡалаһының баш архитекторы Калиберда, бөтәһе 11 кеше инә. Барый Кәлимуллин яңы союз идараһының рәйесе итеп һайлана, ә төҙөлөш инженеры В.Чаплиц уның урынбаҫары итеп раҫлана. Шуны ла әйтергә кәрәк, Башҡортостанда ҙур ғына абруй ҡаҙанған был союз менән төрлө йылдарҙа И.Мироненко, М.Сәхәүетдинова, Ф.Рехмуков, Л.Хихлуха, И.Минкин, Р.Исламов, Р.Авсахов, А.Клемент, У.Ураҡсин етәкселек итә.

Башҡортостан бүлексәһе 1935 йылда уҡ төҙөлһә лә, СССР Архитекторҙар союзы уны 1938 йылдың 23 ғинуарында ғына теркәй, һәм был дата бөгөн дә Башҡортостан Архитекторҙар союзының тыуған көнө тип йөрөтөлә.

1937 йылда Мәскәүҙә, ниһайәт, СССР Архитекторҙар союзының I съезы асыла. Башҡортостандан унда Барый Кәлимуллин менән Мәстүрә Сәхәүетдинова делегат булып ҡатнаша һәм Барый Ғибәт улы Союз идараһы, Мәстүрә Низам ҡыҙы ревизия комиссияһы ағзалары итеп һайлана. Тимәк, Башҡортостан архитекторҙарының Мәскәү алдында абруйы ҙур ғына була, баһаһы ла йылдан-йыл күтәрелә. Союз ағзалары өсөн Ленинградҡа квалификацияны күтәреү курстарына йөрөү, Бөтә Союз архитектура фондынан финанс ярҙамы алыу йәһәтенән киң мөмкинлектәр асыла.

## Һикәлтәләр аша атлағанда

Ул көндө Барый (ул хәҙер 1-се проектлау оҫтаханаһының етәксеһе булып эшләй ине) иртән оҫтаханаһына килеп ҡағыҙ, ҡәләмдәренә тотонорға ла өлгөрмәне, «Башпрогор» тресы директоры Петр Михайлович Ершовҡа саҡырттылар. Кабинетта директор үҙе генә. Уның ниңәлер кәйефе юҡ ине: төҫө ҡасҡан, кистән ныҡ «төшөргәнгәме», бүртенгән күҙ ҡабаҡтарын ышҡый, мыш-мыш танауын тарта. Бүлмә тәмәке төтөнөнә батҡан.

— Һин нимә, Барый Ғибәтович, бер-бер эш боҙоп ташланыңмы? — тип башланы ул һүҙен, йыуан, ҡыҫҡа бармаҡтары менән тағы ла папирос алып ҡабыҙғас. — Ниңәлер икебеҙҙе лә обкомға саҡыралар.

— Боҙорһоң да, — Барый ҡапыл тоҡанып китте. — Мин Ленинградта квалификацияны күтәреү курсында уҡып ятҡанда, кемдер Карл Маркс урамында минең проект менән һалынып бөтөп килгән медиктар һәм артистар өсөн торлаҡ йорттоң ҡыйыығы аҫтына тағы ла бер ҡат өҫтәгән. Ул бит проектты тупаҫ боҙоу, башбаштаҡлыҡ тигән һүҙ. Шуға талашҡайным төҙөлөш инженерҙары менән. Унда һеҙҙең дә «хеҙмәт» барҙыр ул, Петр Михайлович? Ләкин минең проектты боҙоусының авторын әйтмәнеләр. Беҙгә нимә ҡушалар, шуны үтәйбеҙ, тип кенә торалар. Бәлки, шуларҙың береһе башырғандыр обкомға. Хәҙер ошаҡ, донос модала бит.

Тыштан ҡарағанда һәр саҡ тыныс, хатта бер аҙ битараф һәм вайымһыҙ Барыйҙың ҡыҙып китеп тауыш күтәреүенә лә нигеҙ бар һымаҡ. Эш былай була. 1932 йылда «Ленгипрогор» архитекторҙары Өфөнөң 25 йылға һәм 240—250 мең кеше йәшәүгә иҫәпләнгән генераль планын эшләй башлай. Ҡала планының композиция үҙәге итеп көнбайыштан көнсығышҡа һуҙылған Киров исемендәге урамды алалар. Уның Карл Маркс урамына терәлгән осонда емертелгән Александр сиркәүе урынына профессор Кокорин һәм архитектор Базилевич проекты буйынса мәҙәниәт һарайына (хәҙер — Профсоюздар йорто) нигеҙ һалына. Уның алдындағы киң майҙан Карл Маркс исеме менән аталырға һәм ул республика баш ҡалаһының төп майҙаны булырға тейеш тип күҙаллана. Ошо уҡ осорҙа медиктар һәм актерҙар үҙҙәренең торлаҡ кооперативын төҙөп, ҡала властарына ер һорап мөрәжәғәт итә. Уларға буласаҡ майҙандың төньяғынан урын бирелә, ә архитектор Барый Кәлимуллин йорттоң проектын әҙерләй. Уның майҙанға ҡараған фасады, балкондарына эленәсәк керҙәр майҙандың йәмен ебәрмәһен өсөн, бейек парапетлы (тимер, суйын, ағас, граниттан эшләнгән рәшәткә), һәм бер яҡҡа ғына һөҙәк ҡыйыҡ проектлана. Ҡыйыҡ аҫтындағы сарлаҡ кер элергә, башҡа хужалыҡ кәрәк-яраҡтарын һаҡлау урыны булырға тейеш. Ләкин Барый Ленинградта биш айлыҡ курста уҡыған саҡта парапет алып ташлана, сарлаҡ ҙурайтыла һәм торлаҡ фатирҙарына үҙгәртеп ҡорола. Шулай итеп, дүрт ҡатлы йорт биш ҡатлыға әйләнә. Барый менән трест директоры араһында һүҙ шул хаҡта бара.

— Әкрен, Барый Ғибәтович. — Ершов алан-йолан ҡаранды, ишекте асып коридорға ла күҙ һирпте. — Эйе, донос күбәйҙе шул һуңғы ваҡытта, хатта стеналарҙың да ҡолағы бар. Һинең проектҡа килгәндә, голубчик, мин бер нимә лә белмәйем, ундағы үҙгәрештәр тураһында ла тәүләп ишетәм. Тикшерергә кәрәк. Ярай, комиссия төҙөрбөҙ ҙә иртәгә үк ул эште башларбыҙ.

— Алдараҡ кәрәк ине, иптәш директор. Хәҙер тикшереүҙән ни фәтүә, бишенсе ҡат һалынып бөтөп килә бит.

Барый нисек тоҡанһа, шулай тиҙ һүнде, тынысланды һәм, кейенеп, Ершов артынан эйәрҙе.

Уларҙы Яков Быкин үҙе ҡабул итте. Кабинетында яҡын ярҙамсылары һәм фекерҙәштәре — Афзал Таһиров, Әхмәт Иҫәнсурин, Башҡорт АССР-ның Халыҡ Комиссарҙары Советы рәйесе Зиннәтулла Булашев ултыра.

— Йә, егеттәр, төҙөйбөҙ ҙә, һүтәбеҙ-емерәбеҙме? — тип шаяртып ҡаршы алды ул архитекторҙарҙы, түрҙәге ҡыҙыл буҫтау менән ябылған ҙур өҫтәл янына ишаралап. Унда Ишембай ҡасабаһы һәм уның тирәһендәге эреле-ваҡлы ауылдарҙың схематик картаһы ята ине.

— Эш былайыраҡ, иптәштәр, — тип, етди тонға күсте ул һәм указка тотоп картаға яҡынырaҡ килде: — Илдә «икенсе Баку» исемен алған Ишембай промыслалары көндән-көн үҫә, киңәйә. Өфөнән тимер юл үткәргәс, нефть сығарыу тағы ла арта төштө, халыҡ та ишәйә. Тик бына нефтселәргә йәшәү, ял итеү, балаларын уҡытыу өсөн урын һаман хәл ителмәй килә. Хәҙер беҙҙе эшселәр ҡасабаһы ғына ҡәнәғәтләндермәй, беҙ иптәштәр менән кәңәшләштек тә, тәүге башҡорт нефте сыҡҡан ерҙә тәүге башҡорт ҡалаһын һалырға, тигән ҡарарға килдек. Уның генераль планын эшләү «Башпроект»ҡа тапшырыла.

Көтөлмәгән яңы хәбәрҙән Ершов, башына һуҡҡандай, сайҡалып ҡуйҙы, башын борғослап ҡаршы төштө:

— Ҡала, ҡасабаларҙың генпландарын әҙерләү өсөн Ленинградта «Ленгипрогор» проект институты бар, Яков Борисович. — Директорҙың тауышы ниңәлер ҡарлыҡты. — Ул, тик ул ғына Бөтә Союз буйынса генпландарҙы заказ менән эшләп тарата. Әгәр беҙ үҙ белдегебеҙ менән Ишембайға тотонһаҡ, үҙәктә баштан һыйпамаҫтар. Өфөләге ҡайһы бер биналарҙы үҙебеҙ проектлаған өсөн дә мығырлап маташалар, ә хәҙер бөтөнләй шашасаҡтар. Был эш уларҙың прерогативаһы.

— Уныһы ла беҙгә мәғлүм, — тип һүҙгә ҡушылды Зиннәтулла Булашев. — Ләкин беҙ тәүге башҡорт ҡалаһын милли үҙенсәлектәрҙе тәүге урынға ҡуйып һаласаҡбыҙ. Сөнки ҡумта кеүек, әҙер ҡалыпҡа һалып эшләнгән типовой проекттар бөтөн илде баҫып бара. Алыҫ Көнсығыштағы эшселәр ҡасабаһын Украина, йә Пенза өлкәһендәге эшселәр ҡасабаһынан, Белоруссия ҡалаларын Свердловск өлкәһе ҡалаларынан айырып та алып булмай башланы хәҙер. Был килбәтһеҙлек һәм шөкәтһеҙлекте һис кисекмәҫтән туҡтатырға, урындарҙағы проект ойошмаларына ижади эҙләнеү мөмкинлектәрен бирергә кәрәк. Әйткәндәй, ул турала, йәғни Ишембай ҡалаһын үҙебеҙҙең архитекторҙар проектлауҙы һорап, Мәскәүгә мөрәжәғәт иттек инде. Улар ҡаршы түгел. Тимәк, шөрләргә, икеләнергә урын юҡ.

— Беҙгә промышленность предприятиеларын элеккесә ҡала уртаһында түгел, ә унан ситкә сығарып, үҙәк урамдарҙа дәүләт учреждениелары, уҡыу йорттары, мәҙәниәт усаҡтары һалынған, ә уның тирәләй халыҡтың йәшәү шарттарын, үҫеш перспективаларын билдәләгән, милли колоритты күҙ уңында тотҡан ҡала кәрәк, — тип Афзал Таһиров та үҙ фекерен әйтергә ашыҡты.

— Һәм уны, — тип элеп алып китте Быкин, — тик башҡорт архитекторы ғына башҡара ала. — Ул һынсыл ҡарашы менән Барыйҙы айҡап сыҡты ла йәнә карта өҫтөнә эйелде. — Зиннәтулла Ғиззәтович та, Афзал Мөхәтдинович та дөрөҫ әйтә: беҙгә ленинградтарҙың ҡалыплашҡан проекттарынан баш тартырға, үҙебеҙсә эшләргә күптән ваҡыт һәм ҡалаларҙың генераль пландары ла оҙайлы ваҡытҡа иҫәпләнергә, киләсәктә уларҙың үҫеш перспективаларына иғтибар ителергә тейеш. Был Ишембай ҡалаһына ғына ҡағылмай. Әлбиттә, XIX быуатта Башҡортостанда бер генә ҡаланың да һалынмауын иҫкә төшөрһәк, генераль пландарҙы эшләү еңел бирелмәйәсәк. Ленинградтарға ғына ышанып, «алма

беш, ауыҙға төш» тип, ете-ят ағайҙан ярҙам көтөп ятыу һис тә егетлек түгел, иптәш Ершов. Үҙебеҙгә лә ҡыбырларға, башты эшләтергә кәрәк. Был бер. Икенсенән, беҙгә Башҡортостандың башҡа ҡалаларының да генпландарын ҡайтанан ҡарап сығаһы, заман талаптарына яуап бирерлек яңы генпландар эшләйһе бар. Минең белеүемсә, Өфөнөң үҙенең дә бит генераль планы 1819 йылдан бирле тикшерелмәгән һәм ул тәртипһеҙ рәүештә арҡыры-буй үҫә. Уның 25 йылға иҫәпләнгән генпланын әҙерләгән һинең яҡташтарыңдан да рәт юҡ һымаҡ. Сөнки унда хаталар, кәмселектәр тулып ята, ә иң ҙур хата — Киров урамын үҙәк урам итеп, уның Карл Маркс урамына килеп терәлгән ерендә ҡаланың төп майҙанын булдырыу. Минеңсә, Үҙәк майҙан Совет урамы менән Пушкин урамы сатындағы киң, тигеҙ һәм иркен урында булырға тейеш. Беҙ ленинградтарҙың проектын раҫламаныҡ, яңынан тикшерергә, төҙәтмәләр, өҫтәмәләр индерергә кәрәк. Бына ошоларҙы һәм республика ҡалаларының да үҫеүен күҙ уңында тотоп, партияның өлкә комитеты «Башпрогор» эргәһендә махсус архитектура-планлаштырыу мастерскойын асырға тәҡдим итә һәм уның начальнигы итеп...

Петр Ершов та ахмаҡтарҙан түгел. Үҙенә кәрәк саҡта аяғын терәп серәшә, дөрөҫмө-дөрөҫ түгелме, үҙ фекерен яҡларға тырыша. Әгәр ел уға ҡаршы иҫә башлаһа, ҡарышып тормай, ел ыңғайына һыртын ҡуя, үҙенән юғары түрәләрҙең бер алдына, бер артына сыға, уларға ярамһаҡлана, яҡшатлана, тәрилкә тота белә. Ҡыҙыҡ, ҡайҙан килә икән кешегә был сифаттар?

— Минеңсә, Яков Борисович, бында Барый Ғибәтович Кәлимуллиндан да ҡулай кандидатура юҡ, — тип һүҙ ҡыҫтырырға ашыҡты ул, туп һымаҡ һикереп тороп. — Йәшмен тип ҡарап тормай, Өфө моторҙар эшләү заводы эшселәре өсөн Черниковкала торлаҡ йорттар, ул ғына ла түгел, бөтә уңайлыҡтары менән өс ҡасабаның проектын әҙерләп бирҙе. Етмәһә, СССР Архитекторҙар союзының Башҡортостан бүлексәһе рәйесе һәм, аҙаҡ килеп, төп милләт вәкиле, — Ершов беренсе секретарҙың әле генә әйткән һүҙҙәренә төрттөрмәй түҙә алманы. — «Башпрогор»ҙа унан башҡа башҡорт юҡ. Тимәк, бөтә кәрт уның ҡулында.

— Ярар, милләткә ҡағылмай торайыҡ. — Быкин, риҙаһыҙлыҡ белдереп, ҡаш аҫтынан асыуланыбыраҡ Ершовҡа ҡараны ла Барыйға боролдо. Уның күптән түгел генә алып кейгән һоро костюмына, һуңғы йылдарҙа ит ҡунырға өлгөргән ҡалҡыу кәүҙәһенә, киң яурынына, етдиләнеп киткән ҡара һөрөнкө йөҙөнә, өҫтәл ҡырына ышаныслы таянып торған тос ҡулдарына иғтибар итте. «Мал сығасаҡ был егеттән, — тип йылмайҙы секретарь, — мотлаҡ сығасаҡ».

— Йә, килештекме, энекәш? — Ул ҡулдарын Барыйҙың иңбашына һалды.

— Килешмәй ҡара,— тип йылмайҙы йәш архитектор, — һеҙ барыбер мәжбүр итәсәкһегеҙ бит. Тик бер үтенесем бар: мастерской өсөн белгестәрҙе үҙемә һайлап алырға рөхсәт итегеҙ. — Барый, ни әйтер икән тип, директорға ҡарап алды. Тегеһе, бигүк риза булмаһа ла, ҡайҙа барһын, эйәген ҡаҡты. — Мин, — тип һүҙен дауам итте Кәлимуллин, — эш ауыр буласаҡ, өйрәнелмәгән, уйларға кәрәк тип әйтмәйем. Файҙаһы юҡ. Әммә обком яғынан ярҙам, күҙ-колаҡ булып тороу кәрәк. Әлеге иләнмәгән-һуғылмаған мастерскойға килгәндә, уның башланмышы өсөн Юрий Будилович, Павел Дохтуров, Виталий Ефимовтарҙы һорар инем.

— Ҡарале, ҡара, мин уны йыуаш ҡына тип торһам, төптән йыуан ғына күренәһең икән дә. — Быков башын артҡа ташлап көлөп ебәрҙе. — Кемде һайлап алырға белгән. «Йәне теләгән йылан ите ашаған», тиҙәрме башҡорттар? Әйҙә, һинеңсә булһын, тик эште лә тулы программа буйынса талап итәсәкбеҙ. Ә һин, Петр Михайлович, нисек ҡарайһың? — Ул «Башпрогор»ҙың иң яҡшы архитектор һәм инженерҙарына ҡул һонған Кәлимуллинға асыуланып, йөҙө һытылып киткән Ершовҡа өндәште. — О-о, әллә риза түгелме?

— Риза булмай ҡайҙа бараһың инде, — тине директор күңелһеҙ генә. — Һеҙ бит мине бер иҙәндә бейетә башлайһығыҙ. Әйҙә, алһын. Ә эсенән: «Ҡарап ҡарарбыҙ, — тип көйөп, уҫалланып уйланды үҙе, — «Бер йыл тартай һимерә, икенсе йыл бүҙәнә» тиҙәр бит шул уҡ башҡорттар. Һеҙҙеңсә барып сығырмы икән, «Кремль хыялыйҙары». Ләкин уның эске кисерештәрен бер кем дә һиҙмәне.

— Ха-ха-ха! — Алсаҡ күңелле, ҡуйынында таш йөрөтә белмәгән Быкин тағы ла кеткелдәп ҡуйҙы. — Ә һин, Барый Ғибәтович, ошондай яҡшы белгестәрҙе эләктергәс, ҡара, ярты йылдан Ишембай ҡалаһының генераль планы әҙер булырға тейеш.

...Эйе, Барый үҙенә ярҙамсылар итеп арбанан төшөп ҡалғандарҙы түгел, ә иң-иңдәрҙе генә алды. Кемдәр һуң улар?

Юрий Николаевич Будилович — энциклопедик белемле инженер-металлург. Октябрь революцияһына тиклем, металлургия производствоһын өйрәнеү маҡсаты менән, Европаның байтаҡ илдәрен урап сыға. Өфөгә килгәнсе Уралдың суйын һәм ҡорос ҡойоу заводтарында, артабан БАССР Госпланында эшләй. Барый Кәлимуллин мастерскойына күскәс, Ишембай, Стәрлетамаҡ, Белорет, Баймаҡ ҡалаларының иҡтисади үҫеш перспективаларын нигеҙләй. Артыҡ күҙгә ташланып бармаған, баҫалҡы был инженер Барыйҙың яҡын дуҫына әйләнә. Улар республика ҡалаларының генераль пландарын әҙерләү өсөн йыш ҡына командировкаларға бергә сығалар. Үҙ проекттарын яҡлау маҡсатында Мәскәүгә лә бергә йөрөйҙәр.

Павел Павлович Дохтуров — киң эрудициялы белгес. Ҡалаларҙың генпланын әҙерләгәндә уға һыу менән тәьмин итеү, канализация, вертикаль планлаштырыу һәм транспорт, территорияны инженерлыҡ йәһәтенән әҙерләү кеүек эштәр тапшырыла. Ленинград тимер юл институтын тамамлағас, шул уҡ институтта эшкә ҡалдырыла. Бер нисә йылдан ул Өфөгә килә һәм «Башпрогор» тресына урынлаша. Һәр кем менән уртаҡ тел таба белеүсән юғары эрудициялы Павел Дохтуров, Барый Кәлимуллиндың мастерскойы ябылғас, «Башкиргражданпроект» институтының баш инженеры итеп тәғәйенләнә. Һуңғы йылдарҙа Мәскәүҙә йәшәй һәм шунда үлеп ҡала.

Виталий Николаевич Ефимов Кәлимуллин мастерскойында иң тырыш, теремек, эшлекле кеше. Ул ҡалалар генпланының коммуналь-иҡтисад бүлектәрен әҙерләй. Ҡалалар төҙөлөшө өлкәһендә тәрән белеме менән айырылып тора. Башҡортостанға килмәй генә республика ҡалаларының генераль пландарын эшләгән «Ленгипрогор» архитекторҙарының проекттарын юҡҡа сығарырға, урындағы белгестәрҙең эшен яҡларға уға ғына ҡуш. Шунда уҡ тегеләрҙе пыран-заран килтерә, Башҡортостан архитекторҙарының проекттарын ҡабул иттертмәй туҡтамай. Әммә «Башпрогор» буйһонған Коммуналь хужалығы ха-

лыҡ комиссариаты ла, республиканың тормоштан айырылған, юғары материялар тураһында ғына тел сарларға яраҡкан архитектура идаралығы ла үҙ архитекторҙарына түгел, ә «Ленгипрогор» кеүек меңдәрсә саҡырымда ятҡан проект ойошмаларына нығыраҡ ышана, уларға таяна һәм йылдар үтеү менән Кәлимуллин мастерскойын яптырыуға өлгәшә. Ул бөгөн дә шулай: һалынасаҡ ҡала, ҡасаба, йәиһә айырым объектты, ул ергә аяҡ та баҫмаған, географик урынын, тәбиғәт шарттарын, ландшафтын белмәгән Мәскәү, Петербург архитекторҙары проектлай, уны төҙөүҙе көсләп таға.

Ишембай ҡалаһының тәүге генераль планын әҙерләү алдынан Барый Кәлимуллин бригадаһына архитектор Александр Филонов менән инженер Петр Тришин да килеп ҡушыла. Һәм бына улар урыны-урыны менән тауыҡ кисеп сығырлыҡ һай ғына Тәйрүк йылғаһының Ағиҙелгә ҡойған ярында баҫып торалар. Уңда, Торатау итәктәрендә, япраҡтарын еләҫ елгә елберләтеп ҡуйы урман шаулай, арыраҡ Көҫәпҡол, Яр-Бишҡаҙаҡ, Урман-Бишҡаҙаҡ ауылдары эҫе ҡояш аҫтында йоҡомһорап ята. Һул ҡулда, Ағиҙел аръяғында, Аллағыуат һәм Иҫке Ишембайҙың тәҙрәләре тоноҡ ҡына ялтырай. Көнбайышта 1932 йылдың 15 майында тәүге башҡорт нефте атылған 702-се скважина (уны хәҙер «вышка-бабушка» тип йөрөтәләр) ултыра.

Ағиҙелдең һул ярындағы һаҙлыҡ һәм күлдәр араһына һибелгән нефть вышкалары һерәйеп күккә олғашҡан, нефть тулы цистерналарҙы Өфө крекинг заводтарына ашыҡтырыусы паровоздарҙың тупаҫ һәм киҫкен тауышы һауаны телеп үтә, ҡолаҡтарға ярып инә. Ашыҡ-бошоҡ ҡына һалынған барактар, хатта айырым землянкаларҙан торған эреле-ваҡлы эшселәр ҡасабалары Ағиҙелдең уң ярына ла үрмәләй башлаған. Исемдәре лә әҙәмсә түгел бит әле үҙҙәренең: Вышстрой, Перегонный булһынмы шунда, йәиһә ВЭС, Буровой, Ҡыҙыл ауыл...

...Арҡаһына ауыр биштәр, иңбашына ялан планшетын аҫҡан Барый һөҙәк ҡаштаҡтан бер аҙ күтәрелде лә ялан уртаһындағы яңғыҙ имән төбөнә килеп ултырҙы. Ҡулъяулығын сығарып, тиргә батҡан битен һөртөп алды ла иптәштәренә боролдо.

— Бөгөнгә етер, егеттәр. Палаткаларҙы ҡорайыҡ та ял итәйек. Ҡала урынын иртәгә эҙләрбеҙ.

Арттан бер тотам да ҡалмай килеүсе ярҙамсылары, рюкзактарын ергә ташлап, Барый эргәһенә сүгәләне. Бер аҙ тын алғас, кемдер сәйгә һыу алырға тип йылға буйына төшөп китте, утын әҙерләргә урман араһына йүнәлде, кемдер таған яһап ҡаҙан аҫты. Тиҙҙән ҡарағат, ҡурай еләге япраҡтары һалынған сәй ҡайнап та сыҡты, рюкзактарҙағы ризыҡтар түңәрәк эсенә теҙелде.

Экспедиция етәксеһенән байтаҡ олораҡ, тәжрибәлерәк, тормоштоң әсеһен дә, сөсөһөн дә, татлыһын да аҙ татымаған проектанттар Кәлимуллиндың ҡаты ҡуллылығын да, тәүәккәллеген дә, шул уҡ ваҡытта ғәҙеллеген дә, айыҡ аҡыл менән уйлап эш итеүен дә һынап өлгөргәйнеләр инде. Шуға ла сәй эскән арала эш тураһында һүҙ ҡуйыртманылар, ә йәш архитекторҙың нимә әйтерен көттөләр. Ашау-эсеүгә артыҡ әүәҫ булмаған Барый сәйен эсеп бөтөрҙө лә, табындан ситкәрәк ултырып, ялан планшетынан партия өлкә комитетынан алған картаны сығарып алдына һалды.

— Бына, күрәһегеҙме, — тине ул, иптәштәрен үҙ янына саҡырып, — карта бигүк дөрөҫ һыҙылмаған, ашыҡ-бошоҡ эшләнгәнгә оҡшай.

Беҙ ултырған ҡаштаҡта һаҙлыҡ, ә артабан тауҙар теҙмәһе күрһәтелгән, ләкин тауҙар бөтөнләй икенсе яҡта бит. Ҡараңғы төшкәнсе, уйпатыраҡ ерҙе эҙләп киләйек.

Ике айға яҡын йөрөй Кәлимуллиндың экспедицияһы Торатау итәктәрендә. Ниһайәт, буласаҡ ҡала өсөн ҙур ғына аҡланға туҡталалар. Уны арҡыры-буй үлсәп, әллә нисәмә ерҙә шурф ҡаҙалар, ерҙең геологик төҙөлөшөн тикшерәләр, Ишембай ауылының аҡһаҡалдарын йыйып һөйләшәләр, кәңәшләшәләр. Тик карст бушлыҡтары, ер аҫты йылғалары һәм күлдәре юҡлығына тамам ышанғас ҡына ҡала үҙәген, урам сиктәрен билдәләйҙәр, ҡаланың эскиз планын һыҙалар.

Октябрь урталарында, йәғни Яков Быкин билдәләгән ваҡыттан ярты айға алда ҡайтып төшә улар Өфөгә. Ләкин тәүге башҡорт ҡалаһына фатиха биргән Яков Быкин да, Афзал Таһиров та, Зиннәтулла Булашев та, Әхмәт Иҫәнсурин да, «халыҡ дошмандары» тигән ҡара мөһөр баҫылып, ҡулға алынғайны һәм НКВД баҙына ташланғайны.

Шуны ғына көткән Петр Ершов һәм уның яҡлы бер төркөм элекке дворян малайҙары, шулай уҡ уларҙың «Ленгипрогор»ҙағы әшнәләре Барый Кәлимуллин бригадаһының ярты йыл эсендә өлгөрткән генераль планына ҡырҡа ҡаршы сыға һәм уны раҫлаттырмай. Үҙенә лә янап ҡуялар: ҡара, егет, артыҡ шаша башлаһаң, Быкиндар артынан киткәнеңде белмәй ҙә ҡалырһың.

Әммә атаһы һәм атаһының бер туған ҡустыһы Абдрахман совет власы өсөн баштарын һалған, үҙе лә 22 йәшенән Коммунистар партияһында торған Кәлимуллин янауҙарға, ҡурҡытыуҙарға ҡаршы үҙе һөжүм башлай.

— Ленинградтарҙың ғына ауыҙына ҡарап ятыу, уларҙың сейле-бешле проекттарын рәхмәт әйтеп, ҡуш ҡуллап алыу етте беҙгә, — тип ҡәтғи рәүештә сығыш яһай ул «Башпрогор» тресы дирекцияһы менән Архитекторҙар союзы бүлексәһе идараһының берлектәге ултырышында. — Беҙҙең үҙебеҙҙә лә бына тигән йәш архитекторҙар үҫеп килә. Уларға юл бирергә, ижади эштәрендә ярҙам күрһәтергә ваҡыт. Был бер. Икенсенән, әле беҙ әҙерләгән генпланды обкомда ла, Совнаркомда ла хуплап ҡаршы алдылар, ә һеҙ, Петр Михайлович, тотаһығыҙ ҙа шул «Ленгипрогор»ға һылтанаһығыҙ, беҙҙең эшкә аяҡ салаһығыҙ. Әгәр һеҙ артабан да мырҡырап, беҙҙең тәгәрмәскә таяҡ тығып маташһағыҙ, беҙ ҙә юлын табасаҡбыҙ.

Һәм юлын таба Барый. Ленинградтарҙың һүҙенә ҡарап, әлегә тиклем Ишембай ҡалаһының генераль планын раҫламаған Мәскәүгә, Юрий Будиловичты ала ла, үҙе юлға сыға һәм Наркомнефттең Көнсығыш нефть райондары Баш идаралығында уны раҫлаттырмай ҡайтмай. Хәҙер Өфөлә лә уға икенсе күҙ менән ҡарай башлайҙар. Башҡортостан Хөкүмәте хатта Барый Кәлимуллин етәкселек иткән архитектура-планлаштырыу мастерскойы коллективына рәхмәт белдерә, аҡсалата премия менән бүләкләй.

Кеше күтәрә алмаҫлыҡ ауырлыҡтарҙы еңеп, ҡаршылыҡтарҙы емереп яуланған һәм яҡланған генераль план буйынса Ишембай ҡалаһына тәүге нигеҙ ташы һалына, ә өс йыл үткәс, йәғни 1940 йылдың февралендә, РСФСР Юғары Советы Президиумы Указы менән Ишембайға ҡала статусы бирелә.

*«Ишембай район Советы башкарма комитеты карар итә:*

*1. Башкорт АССР-ы Юғары Советы Президиумынан Ишембай эшселәр касабаһына кала статусын биреү тураһында нефтселәрҙең юллауын кәнәғәтләндереүҙе һорарға.*

*2. Ҡалаға Нефтеград тигән исем кушырға.*

*Ишембай район Советы башкарма комитеты рәйесе: Солтанов.*

*1939 йылдың 22 августы.»*

Ошондай документ килтерәләр Ишембай районынан Башҡорт АССР-ы Юғары Советы Президиумына. Был саҡта Барый Кәлимуллиндың архитекторҙар экспедицияһы буласаҡ ҡаланың генераль планын әҙерләгәс, ундағы төҙөлөш эштәре тағы ла йәнләнеп китеп, планлы төҫ алғайны. Ҡалаға ниндәй исем биреү тураһында Барый уйламаны ла: Ишембай Ишембай булып ҡалырға тейеш ине уныңса. Ләкин ҡағыҙҙа шыма ғына яҙылһа ла, уның артындағы ҡытыршылыҡ һәм ҡаршылыҡтарҙы төҫмөрләмәгәндәр икән.

Ана шул хаҡта һүҙ башланы Башҡорт АССР-ы Юғары Советы Президиумы рәйесе Рәхим Ибраһимов «Башпроект» тресының 1-се проектлау мастерскойы етәксеһе Барый Кәлимуллинды саҡырып алып:

— Бына, ҡара, ниндәй ҡағыҙ тоттороп киттеләр миңә ишембайҙар, — тине, район Советы башҡарма комитеты ҡарарын һоноп. — Һин бит ул ҡаланың генераль планы авторы, үҙ фекереңде әйт.

— Кем уйлап сығарған ул туҙға яҙмаған Нефтеград атамаһын? — тип ғәжәпләнде Барый, ҡарарҙы кире биреп. — Беҙ генераль планды әҙерләгәндә Ишембай ҡалаһы тип асыҡ әйткәйнек бит. Солтанов та беләүл турала. Кемдең юлына арҡыры төштө, кемгә оҡшамай икән боронғо башҡорт атамаһы?

— Ситтән килгән нефтселәрҙән башҡа кем булһын?

— Обкомда нимә тиҙәр?

— Уларға, ни, бешкән дә төшкән. Етмәһә, теге саҡта башҡорт зыялыларының башын ашаған, өлкә партия ойошмаһын пыран-заран килтергән Заликинды алмаштырған 1-се секретарь Иван Аношин, ел ҡайһы яҡтан иҫһә, шул яҡҡа елкәнен борорға ғына тора. Үҙ фекере, үҙ аҡылы юҡ уның.

— Әкрен, Рәхим Кирәевич, бигерәк тура бәрәһең түгелме? — Барый, һағайып, ишеккә ҡарап алды. — Был йорттоң стеналарында ла һаҡ ҡолаҡтар барҙыр ул.

— Көсһөҙлөк асыуынан килеп әйтәм, Барый ҡусты.

— Урыҫта «В чужой монастырь со своим уставом не ходят» тигән бик шәп әйтем бар. Ул килмешәктәр үҙҙәренең ҡунаҡ икәнлектәрен онотоп ебәрәләр, шай. Беҙгә килеп, беҙҙе өйрәтеп маташмаһындар. Буласаҡ ҡаланың генераль планында нисек яҙылған, шулай ҡалһын. Ҡыҫа башлаһалар, миңә һылтанығыҙ, ә мин яуабын табырмын.

Икенсе көндә үк Рәхим Ибраһимов Башҡорт АССР-ы Юғары Советы Президиумы исеменән Мәскәүгә Ишембай эшселәр ҡасабаһын ҡалаға әйләндереү тураһында Указ проектын ебәрә.

*«РСФСР Юғары Советы Президиумы Указы:*

*1. Башкорт АССР-ы Юғары Советы Президиумының Ишембай районының Ишембай эшселәр касабаһын республика буйһоноуындағы үҙаллы административ-хужалык итеү бирәмегенә индереп, калаға әйләндереү.*

*2. Ишембай районының Бурансы, Көҫәпкол һәм Смакай ауылдарын Ишембай ҡалаһына ҡушыу.*

*3. Ишембай районының Аллағыуат һәм Наумовка ауыл Советтарын Стәрлетамаҡ районына, Көҫәпкол һәм Байғужа ауыл Советтарын Макар районына күсереү һәм Ишембай районын бөтөрөү тураһындағы Ҡарарын раҫларға.*

*1940 йылдың 10 феврале.»*

СССР Архитекторҙар союзының 1937 йылда үткән I Ойоштороу съезында сығыш яһап, союздың Башҡортостан бүлексәһе рәйесе Барый Кәлимуллин халыҡтың архитектура ҡомартҡыларын йыйыу, туплау, өйрәнеү һәм уның алдынғы өлгөләрен бөгөнгө төҙөлөштәрҙә файҙаланыу проблемаһын күтәрә.

— Беҙҙең Башҡортостанда ла, — ти ул, — халҡыбыҙҙың архитектура ҡомартҡылары байтаҡ. Йылдар, быуаттар үтеү менән кәшәнәләр, һарайҙар, ҡәлғәләр, хатта ҡалалар емерелә, тарих туҙанына күмелеп юҡҡа сыға. Әгәр беҙ, архитекторҙар, уларҙы ваҡытында күреп, ғилми яҡтан тикшереп, план-схемаларын һыҙып, яҙып ҡалдырмаһаҡ, килер быуын үҙҙәренең ифрат бай тарихын да, архитектура ҡомартҡыларының булғанлығын да белмәйәсәк. Йырҙарыбыҙ, моңдарыбыҙ быуаттар эсенә барып тоташҡан кеүек, архитектура сәнғәтен дә тарихтан айырып алыу мөмкин түгел. Бөйөк рус яҙыусыһы Николай Васильевич Гоголдең: «Архитектурала донъя йылъяҙмаһы. Тик ул йырҙар, ауыҙтел ҡомартҡылары тынғас ҡына һөйләй башлай», — тигән һүҙҙәрен онотмаһаҡ ине, иптәштәр!

Съезд Барыйҙың сығышына юғары баһа бирә, ул ғына ла түгел, архитектура ҡомартҡыларын өйрәнеү һәм һаҡлау тураһында махсус ҡарар ҡабул итә. Был турала «Строительная газета» үҙенең 1937 йылдың 23 июнь һанында яҙып сыға һәм башҡорт архитекторының архитектура ҡомартҡыларын ғилми яҡтан тикшереүҙең тәүге ҡарлуғасы тип атай.

Йәнә бер йылдан һуң, 1938 йылдың 7—11 июлендә, Ленинградта СССР Архитекторҙар союзы идараһының ҡалаларҙы планлаштырыу һәм төҙөү мәсьәләләренә арналған III пленумы булып үтә. Советтар Союзының төрлө мөйөштәренән йыйылған архитекторҙар, коммуналь санитария һәм гигиена белгестәре, урындарҙағы ҡала хужалыҡтары ҡатнашлығында үткән пленум асылда ҡала төҙөлөшө буйынса Бөтә Союз конференцияһына әйләнә. Көн тәртибенә ул заман өсөн бик мөһим, күп тармаҡлы мәсьәләләр сығарыла: ҡалаларҙы планлаштырыу һәм төҙөү практикаһы; ауыл һәм ҡалаларҙы планлаштырыу практикаһында санитар-гигиена мәсьәләләре; халыҡ йәшәгән квартал, ҡалаларҙы планлаштырғанда инженер-транспорт төҙөлөшө; проект-планлаштырыу эштәренең күләме һәм йөкмәткеһе; ҡалаларҙы планлаштырғанда һәм төҙөгәндә ҡала архитекторының тотҡан урыны.

Пленум барған көндәрҙә СССР-ҙың ҡала һәм ауылдарын планлаштырыу, төҙөү һәм реконструкциялау практикаһын сағылдырған күргәҙмә асыла. Унда Барый Кәлимуллин мастерскойы әҙерләгән Ишембай ҡалаһының алдағы 10 йыл өсөн 45 мең кешегә иҫәпләнгән генераль планы төп урындарҙың береһен алып тора. Ваҡиғаларҙы уҙып, шуны ла өҫтәргә кәрәк: үткән быуаттың илленсе йылдарында Ишембайҙың халыҡ һаны ысынлап та 45 меңгә етә. Тимәк, Барый Кәлимуллиндың ҡала перспективаһы буйынса күҙаллауы математик аныҡлыҡ менән дөрөҫкә сыға.

Артыҡ та түгел, кәм дә түгел. Ун йыл үткәс тағы ла генплан әҙерләргә кәрәк. Уныһы инде икенсе мәсьәлә.

Пленумды ҡыҫҡаса телмәр менән Архитекторҙар союзы рәйесе, профессор Василий Веснин аса.

— Илебеҙ төҙөлөштәрендәге ҙур һәм мөһим уңыштар, алға китештәр менән бер үк ваҡытта, — ти ул үҙенең сығышында, — беҙҙә етди кәмселектәр, хаталарға ла юл ҡуйыла. Архитекторҙар үҙҙәренең ниндәй бурыстар алдында торғанын аңлап етеңкерәмәй. Бөгөнгө архитектор үҙенең төп эше буйынса белгес кенә түгел, ә тулы хоҡуҡлы граждан да, дәүләт эшмәкәре лә булырға тейеш. Үкенескә ҡаршы, ҡалалар төҙөлөшө йәһәтенән беҙ хөкүмәтебеҙгә тейешле ярҙам күрһәткәнебеҙ юҡ. Бөгөнгө пленум ҡалаларҙы планлаштырыу һәм төҙөүҙәге эштәргә йомғаҡ яһарға, етешһеҙлектәрҙе ҡыйыу һәм аяуһыҙ асырға, уларҙы бөтөрөү юлдарын эҙләргә һәм табырға бурыслы.

Пленумдың икенсе көнөндә Барый Кәлимуллинға ла һүҙ бирелә:

— Ҡала архитекторы, беҙҙең ҡарашҡа, юғары квалификациялы, тәжрибәле һәм абруйлы кеше, ҡала Советы башҡарма комитеты рәйесенең төҙөлөш буйынса урынбаҫары булырға тейеш. Ләкин бөгөнгө ҡала архитекторҙары быға өлгәшкәне юҡ әле. Ни өсөн? Бөтәһенән элек ҡала архитекторының әлегә тиклем законлаштырылған хоҡуҡтары һәм бурыстары юҡ. Икенсенән, РСФСР-ҙың күпселек ҡалаларына, йәнәһе, улар тәжрибәлерәк, белемлерәк тигән булып, ҡала архитекторҙары вазифаһына Мәскәү һәм Ленинград архитекторҙарын ебәрәләр. Улар, ғаиләләрен күсермәй генә, бер-ике йыл эшләп, юғарыраҡ вазифаға өлгәшәләр ҙә, ҡайтыу яғын хәстәрләй башлайҙар. Улар урынына икенселәре, өсөнсөләре килә. Ошо «сихырлы түңәрәк»те өҙөү өсөн Коммуналь хужалығы халыҡ комиссариаты һәм Архитекторҙар союзына ҡала архитекторының хоҡуҡтарын законлаштырырға һәм ҡала архитекторы вазифаһына ситтән килгән «варяг»тарҙы түгел, ә үҙ ҡалаһын биш бармағы кеүек белгән, уны яратҡан урындағы архитекторҙарҙы тәғәйенләү тураһында уйларға кәрәк. Республика, өлкә, крайҙарҙы иерархия баҫҡысы буйлап күтәрелер өсөн трамплин итеп файҙаланған күскенселәрҙән ҡотолорға ваҡыт түгелме икән?

СССР Архитекторҙар союзы идараһының тағы ла бер пленумы тураһында һүҙ алып бармаҡсымын. Сөнки унда ла Барый Кәлимуллин сығыш яһай. 1938 йылдың 25 декабренән 1939 йылдың 3 ғинуарына тиклем Мәскәүҙә бара ул. Көн тәртибенә мәктәп, балалар баҡсалары, бала табыу йорттары төҙөүҙе планлаштырыу мәсьәләләре сығарыла.

Барый Кәлимуллин сығышынан:

«Беҙҙә бөгөн йөҙҙәрсә мәктәптәр, балалар баҡсалары һәм ясленәр төҙөлә. Әммә уларҙы планлаштырыу һәм проектлауҙы килгән-киткән архитекторҙар башҡара. Сөнки урындарҙағы архитекторҙар менән артыҡ иҫәпләшеп бармайҙар Мәскәүҙә. Уларға һан да, иғтибар ҙа юҡ. Шул уҡ ваҡытта үҙҙәрен был өлкәлә монополист тип иҫәпләгән Наркомпрос һәм Наркомздравтың проект мастерскойҙары түбән сифатлы проекттар әҙерләүен дауам итә. Беҙ иһә уларҙың эшкинмәгән проекттары буйынса балалар учреждениеларын һалғанда ҡарап ҡына торорға тейешбеҙ, үҙгәртеү, уларҙың хаталарын, кәмселектәрен төҙәтеү тыйыла.

Пленумдарҙа типовой проекттар, проектлауҙың сифатын яҡшыртыу, стандарттар тураһында күп һөйләһәк тә, уларҙы аҙағына тиклем ет-

кергәнебеҙ юҡ. Архитекторҙар союзы идараһының II пленумында ла ул хаҡта һүҙ ҡуҙғатылғайны, әммә идара һаман ҡыбырламай. Илдең күренекле архитекторҙары ла балалар учреждениеларын проектлауҙан алыҫ тора. Юҡ-бар менән ваҡланғылары килмәй, ахыры.

Илебеҙ архитекторҙарын киң төҙөлөштәрҙе, шул иҫәптән балалар учреждениеларын проектлауға йәлеп итеү өсөн пленумдан һуң уҡ балалар баҡсалары һәм яслеләре, мәктәптәр, бала табыу йорттарын проектлауға конкурс иғлан итергә, уларҙың иң яҡшыларын Мәскәүгә, Бөтә Союз конкурсына ебәрергә тәҡдим итәм. Әгәр бөтә архитекторҙар ҙа был эштә әүҙем ҡатнашһа, өлгө булырлыҡ проекттар алмауыбыҙ мөмкин түгел.

Тағы ла шуны әйтмәксемен: РСФСР наркоматтарының архитектура мастерскойҙарында урындарҙағы белгестәргә һауалы һәм мыҫҡыллы ҡарау ғәҙәткә ингән. Улар беҙҙәге төҙөлөштәр өсөн урындарҙағы шарттарҙы иҫәпкә алмаған сейле-бешле проекттарын ебәреүҙе һаман дауам итә. Ярамағанмы һеҙгә, йәнәһе. Йыш ҡына шулай ҙа була: наркоматтар урындарҙағы дәүләт властарын да һанға һуҡмай. Бөтә Союз ауыл хужалығы күргәҙмәһе өсөн беҙ әҙерләгән Башҡортостан павильоны проектын БАССР Халыҡ Комиссарҙары Советы ҡабул иткәйне инде. Баҡтиһәң, бер үк ваҡытта Гольц мастерскойына ла ошондай уҡ заказ бирелгән икән. Беҙҙең Совнарком уны кире ҡаҡһа ла, Мәскәүҙә уның проектын раҫланылар. Был туранан-тура республиканың эштәренә тупаҫ ҡыҫылыу, башбаштаҡлыҡ түгелме ни?

Эйе, үткән 1937—1938 йылдарҙа хөрт проекттар буйынса наҙан прорабтар тарафынан килбәтһеҙ һәм күрекһеҙ объекттар аҙ төҙөлмәне беҙҙә. Төҙөлөштәргә үҙ архитекторҙарыбыҙҙы беркетеп, үҙәктән килгән проекттарға төҙәтмәләр индереү ҙә тейешле һөҙөмтә бирмәне. Ошондай түбән сифатлы проект менән башланған төҙөлөштәрҙең береһенә оло ғына архитекторыбыҙ консультация биреүҙән хатта баш тартты. «Сөнки, — тине ул, — илке-һалҡы эшләнгән һәм урындағы шарттарҙы, милли үҙенсәлектәрҙе һанға һуҡмаған проект буйынса башланған төҙөлөшкә консультация бирергә намыҫым ҡушмай».

Үҙәкте тәнҡитләгән бындай сығыштар өсөн бөгөн дә баштан һыйпамайҙар, әлбиттә. Ил өҫтөндә, Дамокл ҡылысы һымаҡ, шәхес культы торғанда, Барый Кәлимуллиндың Мәскәү трибунаһынан ошондай һүҙҙәрҙе бөтә илгә ярып һалыуы — үҙе бер ҡыйыулыҡ, батырлыҡ бит, һәм уны тик үҙ республикаһына мөкиббән бирелгән, үҙ төйәгенең ысын патриоты ғына әйтә ала. Әммә был юлы ла Барыйҙың сығышын пленумда хуплап ҡаршы алалар. Алыҫ һәм яҡын республика, өлкә, крайҙарҙан килгән архитекторҙар айырыуса оҡшата уның сығышын. Сөнки улар ҙа Мәскәү һәм Ленинград архитекторҙарының бер ҡалыпҡа һалынған проекттарын көсләп тағыуҙан ыҙа сигә икән. Башҡортостан вәкиленең туранан-тура бәреп әйткән һүҙҙәре, үткер тәнҡите уларға яңы көс, ышаныс бирҙе, һәм кис ҡунаҡханала бергә йыйылышып, киләсәктә лә улар үҙ-ара бәйләнеште өҙмәҫкә, бер-береһенә ярҙам ҡулы һуҙып торорға һүҙ беркетешәләр. Шуға ла шатланып, ҡанатланып ҡайта Барый Өфөгә һәм дәртләнеп эшкә тотона. Үҙенең киләсәккә пландары, уйфекерҙәре тураһында Новосибирскиҙа шул уҡ инженер-төҙөлөш институтында уҡып йөрөгән Сәмиғулла ҡустыһына ла хат яҙып ебәрә. Әле мәктәптә уҡыған йылдарында уҡ ағаһы һымаҡ һүрәт төшөрөргә өйрәнеп алған Сәмиғулланы Новосибирскиға барырға Барый үҙе өгөтләй. 1934

йылда Өфөлә диплом алды практикаһын үткәндә 3—4 көнгә Мәстәуылға ҡайтып килгәйне Барый. Был саҡта Сәмиғулла, Мәсәғүт педагогия техникумын тамамлап, ауылда уҡытып йөрөй ине.

— Черчениенан да дәрестәр алып бараһыңмы? — тип ҡыҙыҡһына ул, ҡустыһының кәштәлә ятҡан конспекттарын асып ҡарап. — Һыҙмаларың былай нисауа күренә.

— Тырыштырабыҙ инде шунда. — Ағаһына мөкиббән бирелгән, уны алла урынына күргән Сәмиғулла оялып ҡына яуап бирҙе. — Артабан уҡырға ине лә бит, тик әлегә ҡайҙа барырға белмәйем.

— Әйҙә, ул саҡта Новосибирскиға, — Барый шунда уҡ эләктереп алды. — Мин уҡыған инженер-төҙөлөш институтында конкурс әллә ни ҙур түгел. Уҡытыусылар ҙа таныш. Ярҙам итермен.

Егет күнә һәм бер ҡыш Барыйҙарҙың былай ҙа тығыҙ фатирында тороп рабфакта уҡый ҙа, 1935 йылда Барый уҡыған факультетҡа имтихан тотоп, студент булып китә. Уны 1940 йылда тамамлай һәм Башҡортостанға юғары белемле архитектор булып ҡайта.

## Көрәш артынан көрәш

Оло пландар, яҡты хыялдар менән янып-көйөп, яңынан-яңы проекттар өҫтөндә тир түгеп эшләгәндә, Советтар иленә фашистар Германияһы ябырыла. «Башпроект» тресының бөтә ир-аты тиерлек фронтҡа оҙатыла, республика төҙөлөштәре өсөн проекттар әҙерләү ҙә туҡтала. Һуғыштың икенсе йылында Барый ҙа хәрби хеҙмәткә алына һәм полк, батальон штабтары начальниктары вазифаһына уҡытыу өсөн Өфөнөң Офицерҙар йортонда асылған «Выстрел» юғары курсына ебәрелә. Был ваҡытта илдең көнбайыш өлкәләренән эвакуацияланған завод-фабрикалар Өфөгә, республиканың башҡа ҡала, ҡасабаларына килеп тула башлай, ә уларҙы планлы рәүештә урынлаштырыу, асыҡ һауала яңы предприятиелар һалыуҙы проектлау өсөн белгестәр юҡ. Тик шунда ғына БАССР Халыҡ Комиссарҙары Советы рәйесе Сабир Ваһаповҡа «Выстрел» курсында бер нисә архитекторҙың уҡып ятыуын һәм тиҙҙән фронтҡа китәсәктәрен әйтәләр. Ул шунда уҡ курсант-архитекторҙарҙы үҙ янына саҡырта һәм улар араһында ауылдашы Барый Кәлимуллинды ла күреп:

— Ә һинең бронең бар ине бит, — тип уға ташлана. — Ҡайҙа иттең?

— Башҡалар фронтта ҡан түккәндә, тылда ятырға намыҫым етмәне, Сабир ағай, — ти Барый. — Военкоматҡа биреп ҡалдырҙым.

— Герой, — тип әрләй башлай уны Совнарком рәйесе, — тылда ла фронт бит, тик бында пулялар ғына осмай. Беҙ көнбайыш өлкәләрҙән килгән предприятиеларҙы ҡайҙа урынлаштырырға, проекттарын кемдән эшләтергә белмәй баш ватабыҙ, ә улар еңел генә фронтҡа һыҙмаҡсылар. Не выйдет! — ул телефонға тотона һәм Республика хәрби комиссариатына шылтыратып, өс архитекторҙы, шул иҫәптән Барый Кәлимуллинды ла фронтҡа ебәрмәүҙәрен һорай һәм шунда уҡ уны «Башпроект» тресының директоры итеп тәғәйенләй.

— Ябылған тресты яңынан асыу һәм һеҙ әйткән предприятиеларҙы урынлаштырыу проекттарын әҙерләү өсөн өс архитектор ғына аҙ, — тип ҡаршы төшөргә баҙнатсылығы етә Барыйҙың. — Беҙгә йәнә 5—6

архитектор, унлаған төҙөлөш инженеры, чертежниктар, сантехниктар, территорияларҙы төҙөкләндереү белгестәре, геодезистар, башҡа профессия кешеләре кәрәк. Ә уларҙың бөтәһе лә тип әйтерлек фронтта.

— Бына нимә, Барый ҡусты, — Сабир Әхмәтйән улы уйланып, ишекле-түрле йөрөп ала ла өҫтәле артына барып ултыра. — Һин хәҙер ҡайт, трестағы эштәреңде ҡараштыр, яйға һал да, өс көндән ниндәй белгестәр кәрәклеге тураһындағы ҡағыҙ менән үҙемә кил. Хәл итмәҫлек мәсьәлә түгелдер бит. Кәрәк икән, фронттан да саҡыртырбыҙ.

«Башпроект» директоры үҙе лә ярҙам көтөп тик ятмай: Башҡортостан биләмәләрендә ойошторолоусы частарҙан белгестәр эҙләргә сыға, «ысынлап илаһаң, һуҡыр күҙҙән дә йәш сыға» тигәндәй, табыла бит архитектура һәм төҙөлөш инженерҙары, чертежниктар һәм геодезистар. Сабир Ваһапов та әйткән һүҙендә тора: Барый биргән исемлек буйынса фронттан архитекторҙар, төҙөлөш инженерҙары ҡайтарыла, Мәскәү, Киев, Одесса ҡалаларынан, Балтик буйы республикаларынан эвакуацияланған архитекторҙар ҙа «Башпроект»ка эшкә килә. Хатта Испания республикаһының элекке Төҙөлөш министры урынбаҫары Мануэль Санчес-Аркас та Өфөгә килеп һыйына һәм башҡорт архитекторҙарына үҙ хеҙмәтен тәҡдим итә. Уларҙың эскерһеҙ һәм киң яҡлы төплө ярҙамы менән республика ҡалаларында завод корпустары ҡалҡып сыға, инженер ҡоролмалары, юлдар һалына. Ҡайҙалыр көнбайышта ҡан ҡойғос ауыр һуғыш бара, ә тәрән тылдағы Башҡортостан гигант төҙөлөш майҙанына әйләнә. Сөнки бөтәһе лә фронт өсөн, бөтәһе лә еңеү хаҡына!

Ҙур төҙөлөш майҙанына әйләнгән Башҡортостан шул төҙөлөштәрҙе проектлай алырлыҡ юғары белемле архитекторҙарға ҡытлыҡ кисерә. Айырыуса халыҡ араһынан сыҡҡан һәм республиканың милли йөҙөн, милли колоритын торлаҡ йорттарҙа, халыҡ мәғарифы, мәҙәниәт һәм сәнғәт учреждениеларында сағылдырырҙай башҡорт егеттәре юҡ кимәлдә. Шуға ла бер-ике йылға ғына договор төҙөп, ғаиләләрен ҡалдырып, оҙон аҡсаға ымһынған Ленинград, Мәскәү архитекторҙары Башҡортостанға килеп тула. Уларға бөтәһе лә барыбер, бешкән дә көйгән, Нева ярҙарында шаблонға ҡоролоп әҙерләнгән типовой проекттарын бындағы төҙөлөштәргә көсләп тағалар. Ҡаршы һүҙ әйтеп ҡара: шундуҡ Мәскәү менән ҡурҡыта, янай, милләтселектә ғәйепләй башлайҙар. Милләтселек мөһөрө баҫылды икән, НКВД-ға саҡырыуҙарын, йә килеп алыуҙарын көт тә тор.

Был баҫымдан, ете-ят ағайҙарҙың башҡорт архитекторҙарына үҙ ихтыярҙарын тағыуынан нисек ҡотолорға? Юл бер генә — үҙ республикаң өсөн архитектор кеүек һирәк профессия кадрҙарын үҙ республикаңда әҙерләү. Әле Новосибирскиҙа уҡыған йылдарында уҡ тыуған уй-хыялдары Барыйҙы ғүмер буйы оҙатып килде. «Әгәр үҙебеҙҙең республикала архитектура йүнәлешендәге юғары уҡыу йорто асҡанда, — тип уйлай торғайны ул, — алыҫ Себергә, йә Ленинградҡа барып та йөрөмәҫ инек. Эх, ул көндәрҙе күреп булырмы икән?» Ҡоро уйҙар диңгеҙендә генә гиҙмәй Барый, ә ошондай институт, йә булмаһа башланмыш өсөн факультет астырыуҙы юлларға тотона. 1937 йылда «Красная Башкирия» гәзитендә «Ауылға архитектор кәрәк» тигән мәҡәләһе менән был проблеманы тәүләп күтәреп сыға. Кәлимуллиндың инициативаһын партия өлкә комитеты менән Башҡортостан хөкүмәте лә хуплап ҡар-

шы ала һәм Мәскәү алдында республикала төҙөлөш институты, бик тә булмаһа Өфө вуздарының береһендә факультет асыуҙы юллай, ләкин йыл артынан йылдар үтә, ә мәсьәлә оҙаҡ хәл ителмәй. Шул уҡ ваҡытта Башҡортостандан территорияһы менән дә, иҡтисад яғынан да күпкә ҡайтышыраҡ Эстония ССР-ында бер архитекторға 6 мең кеше тура килһә, беҙҙә 120 мең кешегә, йәғни 20 тапҡырға артыҡ. Төҙөлөш-монтаж эштәрен һумдарға әйләндергәндә лә, эстондарҙан 16 тапҡырға кәм килеп сыға. Тимәк, Башҡортостанда архитекторҙар һәм төҙөлөш инженерҙары әҙерләүсе юғары уҡыу йорто маҡсатҡа ярашлы ғына түгел, бәлки күптән өлгөрөп еткән мәсьәлә. Әммә Мәскәү республикала институт астырыуға һәр саҡ ҡаршы төшөп килде, бөгөн дә ҡаршы һәм Башҡортостанды ете ятып бер төштәрендә күрмәгән өс көнлөк күбәләк кеүек архитекторҙарын ебәреүен дауам итә. «Бүре балаһын бүреккә һалһаң да, урманға ҡарай» тигәндәй, тегеләре килеп фатир ала ла, бер-ике йыл эшләйме-юҡмы, фатирҙарын һатып, йә алмаштырып, ҡойроҡтарын һыртҡа һала. Оҙаҡ һәм ныҡышмалы талаптар менән Мәскәү тупһаларын йыш тапау һөҙөмтәһендә генә 1960 йылда Өфө авиация институтында сәнәғәт-төҙөлөш инженерҙарын әҙерләү буйынса ситтән тороп уҡыу бүлеге асыла. Авиация һәм төҙөлөш!? Ғәжәп бит! Был ике төр һөнәр тармаҡтарын берләштереү мөмкин түгел, һәм ул бүлексә ете йылдан һуң ябыла. Унда бер аҙ, Ҡазанға киткәнгә тиклем, Барый Кәлимуллин да доцент сифатында эшләп ала. Хәҙер партияның өлкә комитеты хәйләкәрерәк юлды һайлай һәм Өфө авиация институтын политехник институтҡа әйләндереп, унда инженер-төҙөлөш факультетын асыу уйы менән элекке Үҙәк баҙар майҙанында бер туған Барый һәм Сәмиғулла Кәлимуллиндар проекты буйынса илленсе йылдар башында һалынған Советтар йорто бинаһы, уға Карл Маркс һәм Пушкин урамдары мөйөшөндәге Башҡортостан ауыл хужалығы институты һәм Пушкин урамындағы авиация техникумы биналарын да өҫтәп, авиация институтына бирелә. Ленин һәм Революция урамдары сатындағы авиация институты бинаһына иһә авиация техникумы күсә.

Партия Үҙәк комитеты 1952 йылдың июлендә Башҡорт АССР-ын Өфө һәм Стәрлетамаҡ өлкәләренә бүлә. Өфө өлкә партия комитеты һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы өсөн ашығыс рәүештә Советтар йорто тип аталған яңы бина һалына. Ләкин ике өлкә оҙаҡ йәшәмәй. Сталин үлеү менән, 1953 йылдың апрелендә өлкәләр бөтөрөлә, ә Советтар йорто бинаһы яңы хужа — авиация институтына тапшырыла. Республика етәкселәренең политехник институты астырыу планы ла барып сыҡмай: СССР авиация сәнәғәте министры Дементьевты еңә алмай улар. 1968 йылда Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы рәйесе Зекерейә Аҡназаров СССР Юғары Советы сессияһында һүҙ ала һәм Башҡортостанға ҡырын күҙ менән ҡараусы Союз министрлыҡтарының тетмәкәйен тетә, Өфөлә төҙөлөш-архитектура институты, бик тә булмаһа факультет астырыу мәсьәләһен ҡабырғаһы менән ҡуя. Боҙ ҡуҙғалғандай була, ләкин тулыһынса түгел. Күп сығымдар түгеп политехник институт өсөн материаль-техник база әҙерләнһә лә, «сәнәғәт һәм граждан төҙөлөшө» специальносы буйынса инженерҙар әҙерләү курсы булдырыла һәм, мыҫҡыллаған һымаҡ, ул нефть институтының торба үткәреү транспорты кафедраһына беркетелә.

Бөйөк Ватан һуғышынан һуң «Башпроект»та бай ғына тәжрибә туплап, хәҙер инде етәкселек итеү вазифаларынан ялҡа башлаған Барый Ғибәт улы тәүге мөмкинлек сығыу менән СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалына күсә һәм башкөллө фән донъяһына сума. 1952 йылда ул Мәскәүҙә «Башҡортостан ҡалалары үҙәк майҙандарының архитектура-планлаштырыу композицияһы» тигән темаға диссертация яҡлай һәм республикала тәүгеләрҙән булып түгел, ә нәҡ беренсе булып архитектура өлкәһендә фән кандидаты тигән ғилми дәрәжә ала.

СССР Архитектура академияһы ғилми советының диссертация яҡлауға арналған ултырышында сығыш яһап, академик В.Н.Семенов былай ти: «Ҡалаларҙың, атап әйткәндә, Башҡортостан ҡалаларының үҙәк майҙандарын планлаштырыу мөһим әһәмиәткә эйә һәм Барый Кәлимуллиндың ғына түгел, бәлки ғөмүми архитектурала тәүге аҙым тиһәм, һис тә хата булмаç. Сөнки бөгөн илебеҙ ҡалаларының үҙәк майҙандары шаблонға ҡоролған план буйынса проектлана, бер-береһенә ике тамсы һыу һымаҡ оҡшатып төҙөлә башланы, ә беҙ уға хатта иғтибар ҙа бирмәйбеҙ. Диссертант иһә шаблондан ҡасып, һәр ҡаланың үҙ йөҙө, үҙенә генә хас милли үҙенсәлеге булырға тейеш, тигән һығымтаға килә. Минеңсә, был — бик дөрөç һығымта, һәм беҙ ҙә уны хупларға, яҡларға хаҡлыбыҙ».

Барый Кәлимуллиндың рәсми оппоненты, академик Н.Я.Колли:

«Башҡортостан ҡалалары миçалында үҙәк майҙандарҙың әле өйрәнелмәгән композицияһын тикшереүе менән архитектор Кәлимуллин уның сиктәрен тағы ла киңәйтте һәм яңы мәғлүмәттәр менән байытты».

Филиалда ең һыҙғанып эшләгән йылдарында Барый Ғибәт улы Башҡортостан райондарына архитектура-эҙләнеү экспедицияларын ойоштора һәм быға тиклем бер кем тарафынан да тикшерелмәгән, өйрәнелмәгән өлкәгә барып керә. Ул — архитектура һәм төҙөлөш сәнғәте ҡомартҡылары. Фәнгә яңы асыштар алып килеү менән бергә, халыҡтың төҙөлөш сәнғәте әçәрҙәре буйынса ла бай материалдар бирә был экспедициялар. Архитектура ҡомартҡыларын тәүләп тикшереүсе Барый Ғибәт улы һәр боронғо ҡоролманы нигеҙенән ҡыйығына тиклем арҡыры-буйға, тәҙрә-ишектәрен миллиметрына тиклем ентекләп, икеөс ҡат үлсәп, ҡағыҙ битенә төшөрә, уларҙың ниндәй материалдан, ҡасан һалынғанын асыҡлай, ил ағаларынан, аҡһаҡалдарҙан төпсөнөп һораша, уларға ҡағылышлы легенда-риүәйәттәрҙе яҙып ала, архивтарҙы аҡтара.

Тупланған «сей» материалдарға тәрән һәм киң яҡлы анализ яһап, Барый Кәлимуллин 1956—1958 йылдарҙа «Башҡортостандың архитектура ҡомартҡылары» тигән дөйөм исем менән «Хөсәйенбәк мавзолейы», «Кәшәнә мавзолейы» (1956 йыл), «Килемдәге һарай» (1957), «Ғибәҙәт ҡылыу ҡоролмалары» (1958) тигән китаптар баçтырып сығара. Ләкин йыйылған бай мәғлүмәт уларға ғына һыймай һәм 1959 йылда башҡорт төҙөлөш сәнғәтенең сығанаҡтарын һәм уларҙағы милли традицияларҙы сағылдырған тағы ла бер китап — «Башҡорт ауылдарын планлаштырыу» тигән монография нәшер итә. Шуның һөҙөмтәһе булараҡ, 1973 йылда 66 йәшлек Б.Ғ.Кәлимуллин Репин исемендәге Ленинград живопись, скульптура һәм архитектура институтында «Башҡорт халыҡ архитектура сәнғәте» тигән тема буйынса республикала тағы ла беренсе булып сәнғәт фәндәре докторлығына диссертация яҡлай.

Өфөлә төҙөлөш институты, һис тә булмаһа архитектура факультеты, йә кафедраһы астыра алмауҙан тәҡәте ҡороған Барый Ҡазанда

һуғыштан һуң ғына асылған инженер-төҙөлөш институтынан саҡырыу ала һәм архитектура кафедраһының мөдире итеп һайлана.

Барый Кәлимуллиндың ҡыҙы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған архитекторы Динара Ширғазина иҫтәлектәренән:

«1967 йылдың 10 апрелендә атайыма 60 йәш тулды. Үҙенең юбилейын ул Ҡазанда инженер-төҙөлөш институтының архитектура кафедраһы мөдире булып эшләгәндә (1966—1971 йылдар) үткәрҙе. Тормошоноң был осорон ул педагогик тәжрибә туплау өсөн файҙаланды, сөнки күп йылдар проект ойошмаларында эшләгән архитектор ул хеҙмәт менән таныш түгел ине. Ҡазан инженер-төҙөлөш институты етәкселәре юбилейҙы үткәреүҙе үҙ өҫтәренә алды. Советтар Союзының төрлө ҡалаларынан, шул иҫәптән Өфөнән саҡырылған күренекле ғалимдар, проектлаусы архитекторҙар атайымды ысын күңелдән ҡайнар ҡотланы, уға ижади уңыш, һаулыҡ, оҙон ғүмер теләне. Атайымдың унда әйткән һүҙҙәре бөгөн дә ҡолаҡ төбөмдә яңғырағандай: «Мин, төпкөл башҡорт ауылынан сыҡҡан ярлы малайы, тормошомда өлгәшелгән бөтә уңыштарым, табыштарым өсөн совет власына, Коммунистар партияһына бурыслы. Әгәр улар булмаһа, бөтә ғүмерем батраклыҡта үтер, башым хәйерселектән сыҡмаҫ ине.»

Ниһайәт, 1971 йылда Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы рәйесе Зекерейә Аҡназаровтың ҡәтғи талабы өҫкә ҡалҡып сыға һәм Өфө нефть институтында төҙөлөш конструкциялары һәм архитектура кафедралары асыла. Уның тәүгеһенә «БашНИИпромстрой» ғилми-тикшеренеү институты директоры, профессор Алексей Филиппович Полак, икенсеһенә яңы ғына Ҡазандан саҡырып ҡайтарылған Барый Ғибәт улы Кәлимуллин мөдир итеп һайлана. Ошо ике ғалим архитектура-төҙөлөш факультетына ла нигеҙ һалып, институт тарихына ингән.

Әгәр төҙөлөш конструкциялары кафедраһы шунда уҡ тейешле белгестәр менән тәьмин ителһә, архитектура кафедраһы өсөн уҡытыусылар юҡ. Нишләргә? Был ҡытыршыланып бөткән мәкерле һорау тәүләп кенә тормай Барый алдында. Аптыраған көндән ул институт ректорына керә һәм, үҙе эшләп киткән Ҡазан инженер-төҙөлөш институтына барып, элекке коллегаларының бер нисәһен Өфөгә килергә өгөтләп ҡарарға тәҡдим итә. Хужа риза була. Фатирһыҙ йәшәгән өс техник фәндәр кандидатын алып ҡайта Барый Ҡазандан. Ректорҙың, фатир мәсьәләһен ыңғай хәл итербеҙ, тигән вәғәҙәһен ишеткәс, тегеләр документтарын ҡалдырып, кинәнеп ҡайтып китәләр. Әммә Барыйҙың салғыһы ташҡа эләгә. Архитектура-төҙөлөш факультетын тейешле кадрҙар менән тулыландырыу бурысы йөкмәтелгән проректор Ҡазан архитекторҙарын алыуҙан баш тарта һәм кафедраны архитектура өлкәһенә бер ниндәй мөнәсәбәттәре булмаған геодезистар менән тултыра. Шулай ҙа Кәлимуллин чиновниктар алдында тиҙ генә бирешергә уйламай, тештәрен ҡыҫып «Проектлау нигеҙҙәре», «Ҡала һәм ауылдарҙы планлаштырыу һәм төҙөү», «Архитектура тарихы», «Торлаҡ һәм йәмәғәт биналарын проектлау» предметтары буйынса лекциялар уҡыуҙы, курс һәм диплом эштәре менән етәкселек итеүҙе һәм консультациялар үткәреүҙе үҙ елкәһенә күтәрә. Архитектураға ҡағылышлы башҡа предметтарҙы сәғәтләп уҡытырға проект ойошмаларынан белгестәрҙе саҡыра. Архитектура кафедраһы асыла асылыуын, ләкин ошо специальность буйынса белгестәр әҙерләү һаман һуҙылып килә.

1976 йылдың 26 ғинуарында КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитеты РСФСР Юғары һәм махсус урта уҡыу йорттары министрлығына

Өфө нефть институтының төҙөлөш факультеты эргәһендә «архитектура» специальносын асыуҙы һорап сираттағы юлланма ебәрә. Июнь айында институт бөтә специальностар буйынса студенттар ҡабул итеү планын ала, ләкин унда «архитектура» специальносы булмай сыға. Ул турала ишетеү менән архитектура кафедраһы мөдире, инде профессор исемен алған Барый Кәлимуллин өлкә комитетҡа китә. Әммә бында ла бик ҡыбырлап бармайҙар. Оло башын кесе итеп, тағы һәм тағы ла шаҡый ул обком ишеген, сәғәттәр буйы идеология секретарының ҡабул итеү бүлмәһендә сират көтөп ултыра. Ниһайәт, Таһир Ахунйәнов уны ҡабул итергә форсат таба.

— Нимә, Барый Ғибәтович, һаман шул бер балыҡ башымы? — тип көләмһерәп һорай ул ҡарт архитекторҙан.

— Эйе, шул уҡ балыҡ башы, — тип яуаплай Кәлимуллин шаяртыуҙы ҡабул итмәй. — Ул хәҙер атаң башына әйләнеп бара инде. Белмәҫһең, әллә бында, әллә тегендә, Мәскәүҙә, «шаярталар». Минвузға шылтыратһаң, рөхсәт ебәргәнбеҙ, тиҙәр, беҙҙең факультет деканы иһә, ундай ҡағыҙ килмәне, ти. Тиҙҙән ҡабул итеү имтихандары башлана, ә беҙ көткән специальность юҡ та юҡ.

— Хәҙер мин уларҙың кәрәген бирәм, — Таһир Исмәғил улы етди төҫ алды ла телефонға тотондо. Бөгөн һыҙлап уянған ҡайһы бер «аҡыллы баштар» Ахунйәновтың тетмәкәйен тетһә лә, республика мәнфәғәтен тәүге урынға ҡуя белде ул һәм, әгәр урынлы тип таба икән, теге йәки был мәсьәләне ыңғай хәл итеү өсөн тәүәккәл, ҡыйыу, ҡәтғи, хатта уҫал да булды. Айырым кешеләргә тупаҫлыҡ, һөмһөҙлөк, тәкәбберлек күрһәткән икән, тимәк, уның сәбәбе булған һәм бында ул турала һүҙ ҡуйыртып тороуҙан фәтүә юҡ.

Тәүҙә ул РСФСР Юғары һәм махсус урта уҡыу йорттары министрлығына шылтырата.

— Һеҙ нимә, ҡыҫыр бисәнән бала таптыраһығыҙ? — тип тылҡый тегеләр үҙҙәренекен. — «Архитектура» специальносын асыу тураһында приказ бынан ике аҙна элек ебәрелде бит.

— Ебәрелгәс, ер тишегенә кереп китмәгәндер ҙәбаһа. Ул саҡта копияһын ебәрегеҙ. Юҡ, тиһегеҙме? Хәҙер үк Елютиндың үҙе менән һөйләшәм. — Ул ҡыҙарынып-бүртенеп трубкаһын ташланы ла, бер аҙ тын алып, йәнә Мәскәү номерын йыя башланы. СССР Юғары һәм махсус урта белем биреү министры менән тынысыраҡ һөйләшә Ахунйәнов. Ни әйтһәң дә, идеология секретары бит: кем менән нисек һөйләшергә белә, Елютин да РСФСР Минвузының һүҙҙәрен ҡабатлай.

— Шулай ҙа, — ти ул һуңынан, — нефть институты ректоры Мәскәүгә йыш йөрөй бит. Приказдың копияһын алып ҡайтһын. Почта менән ебәрһәләр, йә тағы ла юғалыр.

— Рәхмәт! — Ахунйәнов трубканы һалды ла Кәлимуллинға боролдо. — Ишеттеңме, Барый Ғибәтович, «архитектура» буласаҡ. Әле һуң түгел, республика гәзиттәре аша яңы специальность тураһында халыҡҡа еткерергә кәрәк. РСФСР Минвузы приказы килгән бит. Ул институтта булырға тейеш. Эҙләгеҙ. Тәгәрмәскә таяҡ тыҡҡан саботажникты табып, кәрәген бирегеҙ!

Институт проректоры, Бөйөк Ватан һуғышы яугиры, элекке контрразведчик Семен Кузнецов, ентекле тикшереү үткәрә, факультеттағы бөтә документтарҙы күтәрә һәм теге приказды факультет деканы сейфынан

килтереп сығара. Бағтиһәң, РСФСР Юғары һәм махсус урта уҡыу йорттары министрлығы партия өлкә комитетының хатына шундуҡ ыңғай яуап бирә һәм «архитектура» специальносын асырға, тип приказ ебәрә. Приказ, яңы специальносты ҡабул итеү имтихандары планына индерергә тип, факультет деканына тапшырыла, ләкин ул ҡағыҙҙы сейфына йәшерә лә, институттың ситтән килгән документтарҙы теркәү журналына «яуап талап ителмәй» тип яҙып ҡуя. Йәнәһе, мәсьәлә хәл ителгән. Проректор Кузнецов ошо инцидентты ректорға еткерә еткереүен, ләкин мәкерле деканға ҡарата бер ниндәй ҙә сара күрелмәй.

## Хыялдағы ҡалалар

Архитектура кафедраһында, ниһайәт, «архитектура» специальносы асылыу менән, уҡыу-уҡытыу барышы өсөн яуаплылыҡ бермә-бер артты, көсөргәнешлек тә күтәрелде. Әйтерең бармы: республика өсөн кәрәкле белгестәр әҙерләүсе был специальносты булдырыу артынан аҙ йөрөмәне Барый Ғибәт улы, уның ныҡышмалылығы, эҙмә-эҙлеклелеге, аҡыл көсө, ныҡлы ихтыяры ғына Мәскәү чиновниктарын да, был мөһим эшкә аҫтыртын аяҡ салыусыларҙы ла еңеп сығырға ярҙам итте.

Нефть институтында 1201 һанлы «архитектура» специальносы асылыуы республикала киң резонанс, яҡлау һәм хуплау таба. Башҡортостан телевидениеһы, радиоһы, республика гәзиттәре оло архитекторҙың йәш кафедраһын, һаулығын сарыф итеп юллаған специальносты пропагандалай.

«Волга буйы юғары уҡыу йорттары студент-архитекторҙарының Ҡазанда үткән конкурсында Өфө командаһы уңышлы сығыш яһаны, — тип яҙҙы, мәҫәлән, «Вечерняя Уфа» гәзите хәбәрсеһе Сергей Осадчий 1982 йылдың 2 апрелендә сыҡҡан «Йәш кафедра көс ала» тигән мәҡәләһендә. — Нефть институты архитектура кафедраһының буласаҡ ҡала төҙөүселәре, куйбышевтарҙы ғына алға үткәреп, икенсе урынды яуланы».

Өҫтәп шуны ғына әйтергә кәрәк: Волга буйы архитектура институттарының 1983 йылғы конкурсында Өфө нефть институтының архитектура-төҙөлөш факультеты студенттары беренсе урынды яулай һәм I дәрәжә диплом менән бүләкләнә.

Һәм бына, ҡайһы бер мәкерле әҙәми заттарҙың аҫтыртын таяҡ тығыуҙарына ҡарамаҫтан, 1982 йылдың 24 июнендә 1201 һанлы «архитектура» специальносы буйынса белем алған студенттарҙың тәүге сығарылыш дипломын яҡлау башлана. Уны Дәүләт имтихан комиссияһы рәйесе, РСФСР-ҙың атҡаҙанған архитекторы А.Ф.Козлов етәкләй.

Шулай итеп, Барый Кәлимуллиндың тырышлығы, ныҡышмалылығы, тынғыһыҙлығы менән «архитектура» специальносы тар һуҡмаҡтан оло юлға сыға һәм 1982—1985 йылдарҙа ғына 165 архитектор әҙерләнә. Әммә Барый Ғибәт улы һаман ҡәнәғәт түгел, сөнки буласаҡ архитекторҙарҙың күбеһе Өфөнән һәм башҡа өлкәләрҙән, ауылда йәшәүсе башҡорт егеттәре һәм ҡыҙҙары һәр саҡтағыса икенсе, хатта өсөнсө планда ҡала килә.

Тағы ла бер мәсьәлә борсой Кәлимуллинды. Ул да булһа — Башҡортостанда үҙ архитектура мәктәбен булдырыу.

«Киләсәктә беҙҙең бурыс, — тигәйне Барый Кәлимуллин 1982 йылдың 24 июнендә Өфө нефть институтының «архитектура» специальносы буйынса тәүге сығарылыш студенттарының диплом проекттарын яҡлауға

арналған йыйылышында сығыш яһап, — йәмғиәтебеҙҙең юғары идеалдарын үҙ проекттарында сағылдырыусы тәрән белемле архитекторҙар әҙерләү һәм үҙебеҙҙең архитектура мәктәбен булдырыу.»

Үкенескә ҡаршы, ҡарт архитекторҙың изге хыялдары үҙе иҫән саҡта тормошҡа ашмай һәм ул бөгөн дә актуаль проблема булып ҡала, бөгөн дә хәл ителмәгән. Уның сығышынан теүәл 24 йыл үткәс, йәғни 2006 йылдың 14 июнендә «Истоки» гәзите Барый Кәлимуллиндың улы Фуат Кәлимуллин менән ейәне Асҡар Ширғазиндың «Башҡортостан ҡалаларының архитектураһы» тигән мәҡәләһен баҫып сығара һәм бөгөнгө архитектурала ла глобализация процесы барған осорҙа милли-региональ архитектура системаһын, йәғни, Барый Ғибәт улы әйткәнсә, Башҡортостандың үҙ архитектура мәктәбен булдырыу проблемаһын бөтә киҫкенлеге менән ҡуя.

«Һуңғы йылдарҙа, — тип яҙа улар, — Өфөләге байтаҡ объекттарҙы төрөк архитекторҙары һәм төҙөүселәре проектланы һәм төҙөнө. Беренсе сиратта «Башпромбанк», «Социнвестбанк», «УралСиб» банкылары биналарын әйтергә кәрәк. Әлбиттә, төрөк белгестәренең эше башлыса юғары сифаты, биналарҙы ҡыҫҡа ваҡытта сафҡа индереүҙәре менән айырылып тора һәм уларҙан күп нәмәгә өйрәнергә мөмкин. Шул уҡ ваҡытта уларҙың үҙ илдәрендәге төҙөлөштәрҙә нимәләр булып ятҡанына күҙ һалайыҡ әле. Ул турала Бөтә донъя архитекторҙар союзының 50 йыллығына арналған конференцияла (Мәскәү, 1998 йыл) Бөтә донъя архитектура академияһының Совет ағзаһы, төрөк архитекторы Әхмәт Вефик Алыптың сығышынан табырға мөмкин. 14 миллион кеше йәшәгән Истанбул ҡалаһы архитектураһына ҡағылып, ул былай тигәйне: «Был ҡаланың архитектураһы Греция, Оттоман империяһы, Византия культураларын үҙ эсенә алған. Әммә яңы төҙөлөштәр (Босфорҙың йәшел ярҙарындағы виллалар) бөтә картинаны боҙоп, йыш ҡына тарихи гүзәллектәге архитектураға агрессив һөжүм итә. Улар тығыҙлана, тимер-бетон ҡоролмалар бер-береһенә менеп килә, ултыртылған ағастар ҡырыла. Уның менән көрәшеү, хатаны төҙәтеү мөмкин түгел. Истанбул ғибрәте тураһында уйлағыҙ! Мәскәү икенсе аҙым булмаҫмы?»

Ошо миҫалда ғына ла архитектуралағы милли үҙенсәлекте һаҡлау проблемалары — Урал, Волга буйы, ғөмүмән, Рәсәй өсөн генә түгел, бәлки боронғораҡ культуралы халыҡтар өсөн дә актуаль һәм көнүҙәк мәсьәлә. Глобализация был илдәрҙе лә йәлләмәй. Әммә милли һыҙаттарҙы практикала асыҡлауы ауыр. Уларҙы тик халыҡ культураһын тәрән аңлаған, «урын рухы» һәм милли сифаттарға эйә булған белгестәр генә тойомлай ала. Тәжрибә күрһәтеүенсә, ундай сифаттар ошо ерҙә тыуып үҫкән һәләтле архитектор-патриоттарға ғына хас күренеш. Бөтә был факттар, беҙҙеңсә, Рәсәй төбәктәрендә, шул иҫәптән Башҡортостанда ла маҡсатҡа ярашлы һәм системалы милли-региональ архитектура булдырыуҙы талап итә.»

Авторҙар фекеренсә, ете-ят ерҙән килгән архитекторҙарға табыныу, уларҙы ҡолас йәйеп ҡаршылау, глобалләштереүгә йүнәлтелгән проекттарын һис һүҙһеҙ ҡабул итеү һәм төҙөлөш эштәренә программа итеп алыу, һуңғы сиратта, яҡшылыҡҡа килтермәйәсәк. Шуға күрә үҙебеҙҙең тәбиғәт шарттарын, рельефты, ландшафтты, халыҡтың социаль-иҡтисади хәлен һәм тарихын иҫәпкә алып һәм урындағы төҙөлөш материалдарын ҡулланып, архитектура мәктәбен ойоштороу зарур. Бының өсөн

Башҡортостан архитектураһын үҫтереүҙең дәүләт һәм президент кимәлендә программаһы ҡабул ителергә тейеш.

Ул нимәләрҙе үҙ эсенә аласаҡ һуң? Бөтәһенән элек, Мәскәүҙең ҡайһы бер дөйөм белем биреү мәктәптәрендәге һымаҡ, беҙҙең мәктәптәрҙә лә «Архитектура нигеҙҙәре» тигән уҡыу предметын индерергә һәм уны алып барыу өсөн уҡытыусы-архитекторҙар әҙерләүсе Петербург, Дондағы Ростов, Красноярск архитектура-төҙөлөш академияларына йәштәрҙе уҡытырға ебәрергә кәрәк. Ауыл йәштәрен уҡытыу айырыуса мөһим, сөнки улар — космополитизмға һәм урбанизмға бирелмәгән, милли үҙенсәлекте әсә ҡарынында уҡ үҙләштергән үҙ төйәге, үҙ крайының ысын патриоттары. Был бер. Икенсенән, архитектура телен байытыу, уның тарихын тәрән өйрәнеү, киң яҡлы етди ғилми тикшеренеүҙәр алып барыу өсөн Өфө Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында 5—7 кешенән торған сектор, йә бүлек ойоштороу ҙа архитектура һәм төҙөлөш сәнғәте фәненә тос өлөш индерер ине.

Һәм аҙаҡ килеп, әгәр беҙ Башҡортостан архитектураһын үҙаллы үҫеш юлына сығарырға, уны төрлө яҡлап өйрәнергә һәм милли-региональ архитектура булдырырға теләйбеҙ икән, республикала айырым архитектура-төҙөлөш институтын, йә академияһын асыу мотлаҡ. Ул — ҡала, ауылдарыбыҙҙың иртәгәге йөҙө генә түгел, бәлки милләтебеҙҙең киләсәге лә. Новосибирск, Дондағы Ростов, Петербургта ошо йүнәлештә бер түгел, икешәр архитектура-төҙөлөш юғары уҡыу йорттары бар, ә Рәсәйҙең иң ҙур субъект-доноры Башҡортостан бынан мәхрүм. Был ни ғәләмәт? Йылдар буйы һуҙылып килгән «һаҡаллы» проблеманы ыңғай хәл итергә ваҡыт түгелме икән?

Тәүге башҡорт архитекторы Барый Кәлимуллиндың улы Фуат Кәлимуллин һәм ейәне Асҡар Ширғазин республика әһәмиәтендәге мөһим һәм көнүҙәк проблема күтәрә, һәм ул да ҡағыҙ биттәренән сыҡмай ятып ҡалырмы?

## «Каруан да һарай, ай, һалырға...»

— Барый Ғибәтович, һеҙ тарихсы ла, археолог та, этнолог та түгел, ә шулай ҙа халҡыбыҙҙың архитектура ҡомартҡылары буйынса байтаҡ ғилми хеҙмәттәрегеҙ матбуғатта донъя күрҙе, Башҡортостан китап нәшриәтендә лә баҫылып сыҡты, — тип башлағайным мин һүҙҙе осрашыуыбыҙҙың береһендә, — һәм онотолоуға дусар ителгән был өлкәне тикшереүҙә үҙегеҙҙе тәүгеләрҙең тәүгеһе итеп таныттығыҙ...

— Бының өсөн, — тип бүлдерҙе мине ҡарт архитектор, — археолог, йә этнолог булыу-булмау кәрәкмәй ҙә. Уларҙың хеҙмәттәрен белеү, улар ярҙамына таяныу ҙа еткән. Тик уларҙы иләктән силәккә үткәрә белергә генә кәрәк.

Архитектура ҡомартҡыларына юлығыуым ҡапыл ғына килеп сыҡты, — тип көләмһерәп дауам итте һүҙен Барый ағай. — Институтты тамамлаған 1935 йыл ине. Мин ҡатыным Ямал менән ике балабыҙҙы — Фуат менән Линараны — алдыҡ та, Бүздәк районына, уның тыуған яҡтарына, туған-тыумасаларын күрергә тип киттек. Поездан төшкәс, ат яллап, Ахун ауылына юлландыҡ. Минең был төбәккә тәүләп килеүем, шуға ла юл ыңғайы үткән һәр ауылдың өйҙәренә, йорт-ҡаралтыларына иғтибар менән ҡарап барам, уларҙы үҙебеҙҙең Әй буйы ауыл-

дары менән сағыштырам. Бер-ике сәғәттән район үҙәгенән 25 саҡрымда ятҡан Килем тигән татар ауылына килеп еттек. Артыҡ киң булмаған Иҙәш йылғаһы буйлап бара торғас, алдыбыҙҙа ҙур ғына иҫке баҡса, уның эсендә, ауылдың башҡа өйҙәренән үҙенең төҙөлөшө, архитектураһы менән киҫкен айырылып, ҡара ҡарғалар араһындағы ала ҡарға һымаҡ, һерәйеп ҡалҡып торған, тәҙрә ҡаштары ат дағаһына оҡшаш ике ҡатлы боронғо һарай, унан ситтәрәк, уныһы ла ике ҡатлы, таш мәсет ҡалҡып сыҡты. Ылаусыға атын шунда борорға ҡуштым да, тарантастан төшөп, һарай янына ашыҡтым. Ун туғыҙынсы быуат архитектураһына оҡшаған был гүзәл һарай ҡайҙан килеп сыҡҡан, кем проекты менән, ҡасан һалынған, ниңә ул хаҡта, Башҡортостан архитектураһы менән ҡыҙыҡһынһам да, мин бер ни белмәйем. Әллә ҡапылғара күктән төшкәнме? Уйҙарым буталды, фекерем тарҡалды. Эре аҡ таштарҙан һалынған был мөһабәт һарайҙың әле алғы фасадына сығам, әле эсенә кереп, ары-бире осҡан, асыҡ тәҙрә баштарындағы ояларында гөрөлдәгән күгәрсендәр өйөрөн өркөтөп, әләгер-әләкмәй торған мәрмәр баҫҡыстан икенсе ҡатҡа күтәреләм, быялалары ҡойолған, рамдары һәм яңаҡтары ҡаҡшаған тәҙрә аша Иҙәш йылғаһы аръяғындағы туғайҙарға, алыҫтағы күкһел тауҙарға күҙ йүгертәм. Тәбиғәт хоҙурлығын күрә, һиҙә белгән кешеләр йәшәгән бында. Беренсе ҡатҡа төшөүемә баштарына ҡара таҡыя, түбәтәй, аяҡтарына үзбәк калушы, өҫтәренә иҫке елән кейгән, һирәк кенә аҡ һаҡаллы бер нисә ҡарт таяҡтарына таянып мине көтөп тора ине. Улар менән ҡуш ҡуллап күрешеп, үҙемдең кемлегемде әйткәс, әле генә миңә шикләнеп, һағайып ҡараған ҡарттарым йомшарып китте, йөҙҙәренә йылмайыу сатҡылары ятты. Йәшел сиҙәм өҫтөнә теҙелешеп ултырып һөйләшә башланыҡ.

Баҡтиһәң, был һарайҙы һәм мәсетте башҡорт халҡының ҡан дошманы, суҡындырылған татар Алексей Иванович (Ҡотломөхәммәт) Тевкелевтың ейәндәре XIX быуат урталарында һалдырған икән. 1735—1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалдарын ҡанға батырып баҫтырғаны өсөн был ерҙәр батша полковнигына биреләә, яҡын-тирә ауылдарҙың халҡы көслөк менән суҡындырыла һәм крепостнойҙарға әйләндерелә. Килем ауылындағы усадьба ла ана шул крепостной крәҫтиәндәрҙең ҡул көсө, әсе тире менән төҙөлә. Үҙҙәре Өфөлә йәшәгән дворян Тевкелевтар йәй айҙарында ғына Килемгә килеп, күршеләш помещиктарҙы ҡунаҡҡа саҡырып, Сауҡалыҡ тигән ҡайын урманында ҡымыҙ эсеп, йә һарайҙың үҙендә аҙналар буйы типтереп, күңел асып китер булғандар.

Билдәһеҙ архитектор тарафынан проектланған Килем һарайы бик үҙенсәлекле. Тура дүртмөйөш формаһында 18х22 метр (дөйөм майҙаны 396 квадрат метр) итеп һалынған бинаның бейеклеге 8 метр 10 сантиметрға тиң, ләкин ҡаттарҙың бейеклеге бер тигеҙ түгел. Әгәр беренсе ҡаттың бейеклеге 3,8 метр булһа, икенсеһе 4,3 метрға етә. Ҡоролманың дүрт мөйөшөнән Олоғбәктең Сәмәрҡәндтәге билдәле мәҙрәсәһенә оҡшатып, диаметры 1,6 метрлыҡ дүрт түңәрәк таш башня ҡуйылған (ул хәҙер юҡ инде). Кәрниз аҫтындағы тешкә оҡшаш мерландар (биҙәүестәр), һырланып эшләнгән балюстрадалы (рәшәткә, тирәс) балкон — былар бөтәһе лә һарайға мөһабәт һәм ғорур төҫ бирә, — тип тамамланы һүҙен Барый ағай.

Әммә Ахунға ҡунаҡҡа ғына китеп барған йәш архитекторҙың Килем һарайын, мәсетте, иҫке баҡсаны архитектура күҙлегенән ентекләп тик-

шерергә, үлсәмдәрен алырға, һыҙмаларын эшләргә, геодезик тикшереү үткәрергә эш ҡоралдары булмай. Донъя мәшәҡәттәре менән мәж килеп, унда һуғышҡа тиклем дә, һуңынан да барырға форсат теймәй Барыйға. Тик илленсе йылдар башында, СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына эшкә күскәс кенә, Килемгә махсус экспедиция менән килә. Ваҡыт тигән нәмә аяуһыҙ бит ул: был саҡта һарай емерелә башлаған, ә мәсеттең стеналары ғына ҡалған була һәм уға ауыл халҡы ла үҙ «өлөшөн» индергән — төҙөлөш таштары ауыл өйҙәренең нигеҙенә күскән. Шулай ҙа күмәкләшеп гүзәл архитектура ҡомартҡыһының планын, һәр ҡаттың бүлмәләрен, тәҙрәишектәрен һәм баҫҡыстарын үлсәп, ҡағыҙға күсерәләр, уның географик урынын билдәләйҙәр. Һөҙөмтәлә, «Башҡортостандың архитектура ҡомартҡылары» тигән ғилми хеҙмәттең икенсе, «Килем һарайы» тигән өлөшө 1957 йылда Башҡортостан китап нәшриәтендә донъя күрә.

Шулай ҙа Башҡортостандың боронғо архитектура сәнғәтенә арналған китаптар серияһын Барый Кәлимуллин Килем һарайынан түгел, бәлки Хөсәйенбәк кәшәнәһенән башлай. Бының үҙ сәбәбе бар. Ҡайһы бер ғалимдар, элек башҡорттар, йәнәһе, күсмә тормошта йәшәгән, уларҙың даими торлаҡтары, ҡалғәләре булмаған, тип ышандырмаҡсы. Ул фекер бөгөн дә йәшәп килә.

Был раҫлау ысынбарлыҡҡа һис тә тап килмәй. Шәжәрәләргә ярашлы, башҡорттар тарихы V—VI быуаттарға барып еткән ауылдарҙа йәшәй, ә айырым ырыуҙарҙың үҙ төбәктәренә бәйле тарихы меңәр йылдарҙан ашып китә. Башҡорттар, Урал-Иҙел буйы төбәгенең автохтон халҡы булараҡ, ошонда милләт булып формалашҡан. Халыҡ үҙ ырыу биләмәләренән һис ситкә сыҡмаған. Рәсәй составына инеп, Башҡорт ғәскәре ойошторолғас, кантондан ситкә сыға алмағандар, ә 1755 йылғы ихтилалдан һуң башҡорттарға үҙ ғәскәри йорто ерҙәренән ситкә сығыу ҙа ҡәтғи тыйыла. Тимәк, башҡорттарҙа күсмә тормош ғүмерҙә лә булмаған. Йәнә, игенселек ныҡ үҫешмәһә лә, һәр төбәктә әҙ булһа ла ашлыҡ сәскәндәр. Ә йәйге осорҙа малды йәйләүгә сығарыу — ул малсылыҡ хужалығы ысулы ғына, һәм уныһы, белгестәр теле менән әйткәндә, русса «отгонно-пастбищное животноводство», «альпийское животноводство» тип атала. Йәнә, йәйләү ҙә үҙ ауыл ерҙәре сиктәренән сыҡмай, байтаҡ халыҡ ауылда ҡала. Тимәк, тарихсылар башҡорттарҙы «элек күсмә халыҡ» тип күрһәтеүҙе туҡтатырға тейеш.

«Республика биләмәләрендә археологик ҡаҙыныуҙар ваҡытында табылған архитектура ҡомартҡылары беҙҙең эраға тиклемге беренсе мең йыллыҡ урталарында уҡ Ағиҙел ярҙарында игенселек һәм малсылыҡ менән таныш, тимер һәм бронза эшкәртә белгән ҡәбиләләр йәшәгәнлеген раҫлай, — тип яҙҙы уларҙың уйҙырмаларын инҡар итеп Барый Кәлимуллин үҙенең «Башҡорт ауылдарын планлаштырыу һәм төҙөү» тигән китабында. — Өфө һәм республиканың башҡа райондарында ҡаҙыныуҙар ваҡытында табылған һәм V—VI быуаттарға ҡараған төрлө әйберҙәрҙе тикшереп, ғалимдар бында башҡорттарҙың ата-бабалары йәшәгәнлеген иҫбат итә». Уның фекеренсә, хәҙерге Благовещен районының Турбаҫлы ауылы янында табылған боронғо ҡаласыҡ ҙур ҡыҙыҡһыныу уята. СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы 1958 йылда үткәргән ҡаҙылмала ҡаласыҡтың бер өлөшө асылды. Беҙҙең эраның V—IX быуаттарына ҡараған ҡаласыҡ билдәле бер тәртип менән төҙөлгән ярым

землянкаларҙан торған. Тимәк, боронғо башҡорттарҙың ауылдары ғына түгел, бәлки ҡала-кәлғәләре лә аҙ булмаған, тимәк, архитектура сәнғәте лә, мәҙәниәте лә, сауҙа һәм сәнәғәте лә алға киткән, тимәк, башҡорттоң быуаттар төпкөлөнән генә түгел, бәлки эралар араһынан сыҡҡан бай тарихы бар һәм уны тәүгеләрҙән булып Барый Кәлимуллин раҫлай.

Шул уҡ Хөсәйенбәк кәшәнәһен алайыҡ. Ул үҙе ике һүҙҙән тора икән: «кәшәк» — төркисә «мәйет», «үле кәүҙә»; «хана» фарсы телендә «өй», «торлаҡ»ты аңлата. Ике һүҙ бергә ҡушылғас, икенсе һүҙ «нә» аффиксына әйләнә һәм «үлеләр йорто» төшөнсәһен бирә. Был һүҙҙең мәғәнәһен тәүләп тарих фәндәре кандидаты Һ.Йосопов менән Б.Саярғәлиевтар аңлата һәм әйләнешкә индерә. Шишмә тимер юл станцияһынан йыраҡ түгел «Аҡ зыярат» тип аталған ҡәберлектең урта тапҡырын төйәк иткән кәшәнәне 1845 йылда крайҙы өйрәнеүсе Владимир Юматов ентекләп тикшерә, үлсәмдәрен билдәләй һәм «Оренбургские губернские ведомости» журналында 1848 йылдың 1-се һанында сыҡҡан «Чубимин волосының башҡорт ерҙәрендә боронғо ҡомартҡылар» тигән мәкәләһендә Төркөстандан килеп ислам динен таратып йөрөүсе хажи Хөсәйенбәктең 1342 йылда ошо ерҙә үлеп ҡалыуын һәм кәшәнәнең уның ҡәберен уратып һалыныуы тураһында бәйән итә. Стеналарының ҡалынлығы— 1,57, яҡтарының оҙонлоғо — 8,4, бейеклеге 4,2 метрға еткән кәшәнәнең дөйөм майҙаны 33,6 квадрат метрға тиң. Көньяҡтан уға бейеклеге — 2,45, киңлеге 1,7 метрлыҡ ишек, ҡалған өс яҡта 1,29x0,72 метр үлсәмендә өс тәҙрә ҡуйылған. Хөсәйенбәктән һуң бында тағы ла 9 кеше ерләнгән: ике ир кеше һәм береһе ҡатын-ҡыҙ затынан, ҡалғандары — балалар. Кемдәр улар, ҡасан ерләнгән — белгән кеше юҡ. Тик Хөсәйенбәктең ҡәбер ташына: «Үҙенең әүлиәлегенә тоғро булған хажи Хөсәйенбәк Төркөстандың бөйөк әмире Өмәрбәктең улы», — тип уйып яҙылған. Владимир Юматовтан һуң кәшәнәне 1870 йылда Мәскәү археология йәмғиәте ағзаһы Руф Игнатьев килеп тикшерә. Көнсығыш телдәрен яҡшы белгән һәм Өфө губернаһында байтаҡ тарихи ҡомартҡыларҙы асҡан фольклорсы һәм археолог Хөсәйенбәктең вафатын 1052 йылға алып барып тоташтыра. Айырма 290 йыл. Кем хаҡлы? Бәхәстәр һуңынан да тынмай. Уға Барый Кәлимуллин да ҡушыла һәм портал-көмбәҙ тибындағы кәшәнәнең (портал — ишек, ҡапҡа) һалыныуын XII быуат аҙағы — XIII быуат башына ҡайтарып ҡуя. «Сөнки, — ти ул үҙенең версияһында, — Тура хан кәшәнәһе лә портал-көмбәҙ тибында һәм ул да сама менән ошо ике быуат араһында төҙөлгән». «1911 йылда, — тип яҙа артабан Барый Кәлимуллин «Башҡортостандың архитектура ҡомартҡылары» китабының Хөсәйенбәк кәшәнәһенә арналған бүлегендә, — мавзолей ҡайтанан һалына. Ләкин тарихи ҡомартҡыны реконструкциялағанда археология һәм архитектура талаптары үтәлмәй. Иҫке бинанан нигеҙенең ер аҫты өлөшө генә тороп ҡала. Стеналары элеккеһенән 50 сантиметрға йоҡара, ишеге 45 сантиметрға түбәнәйә, ҡоролманың иске һәм тышҡы йөҙө, конструктив нигеҙе ныҡ үҙгәрә. Эшкәртелмәгән эре таштарҙан һалынған стенаны шымартып һәм бүлгеләп һалынған таштар алмаштыра, ә иҫкеләре тәртипһеҙ рәүештә ҡоролма эргәһенә ташлана. Үҙгәртеп ҡороу сәбәпле, ҡомартҡы архитектура сәнғәте йәһәтенән элекке әһәмиәтен юғалта».

Бер үк ваҡытта Барый Кәлимуллин Шишмә районының Түбәнге Тирмә ауылы янындағы Тура хан кәшәнәһенә лә характеристика бирә. Хөсәйенбәк кәшәнәһенән айырмалы рәүештә, был мавзолей беҙҙең көндәргә тиклем

яҡшы һаҡланып килеп еткән. Кәлимуллиндың күҙаллауы буйынса, ҡоролманың архитектура образы ошо яҡтарҙа йәшәүсе башҡорт тирмәһенә тартым. Уның эсе лә, тышҡы яғы ла бик ябай. Стеналары һәм көмбәҙе штукатурланған, имән ишеге һәм тәҙрәләре семәрләнгән. Кәшәнә ҡалынлығы 1,1 метрлыҡ эре таштарҙан һалынған. Тура хан мавзолейынан Ыҫлаҡ йылғаһына табан 300 метр алыҫлыҡта кәшәнәләрҙең икенсеһе лә булған. Бөгөн уның емереклектәре генә ята.

Ни өсөн кәшәнә Тура хан кәшәнәһе тип атала? Барый Кәлимуллин был һорауға ла яуап эҙләй. «Башҡорттарҙың быуындан-быуынға күскән ауыҙ-тел ҡомартҡыларының береһендә (уны Руф Игнатьев яҙып ала) был ҡоролманы Сыңғыҙ хандың алыҫ ейәне Тура хан һалдырған. Тәүҙә ул Себер ханы Күсемдең ҡулы аҫтында йәшәй, ләкин уның менән низағлашып, үҙенең 80 меңлек ғәскәре менән Өфө янындағы, һуңынан уның исеме менән аталған, Туратауға килеп урынлаша. Күп тормай ул бында. Аттарына көтөүлек, ҡыш тибенлек етмәү арҡаһында, Ыҫлаҡ йылғаһы ярҙарына китә һәм ундағы ҡаштаҡтарҙың береһенә һарай һалдыра.

Икенсе бер риүәйәт буйынса, Дим һәм Ыҫлаҡ буйҙарына ноғай кенәздәре йәйләүгә килер булған. Үҙҙәренә ваҡытлыса йәшәү өсөн Ыҫлаҡ ярына башҡорт тирмәһенә оҡшатып һарай һалдырғандар. Әммә быларҙың береһе лә ысынбарлыҡҡа тап килмәй, сөнки, кейеҙ тирмәнән айырмалы, ул ҡоролма бик бәләкәй һәм унда Сыңғыҙ хан тоҡомо ла, ноғай кенәздәре лә йәшәмәҫ ине.

Йәнә бер легенда. Уның буйынса, был бинала енәйәтселәрҙе язалап үлтергәндәр, ә мәйеттәрен яҡын-тирәгә күмгәндәр. Ҡоролманың икенсе — «хөкөм йорто» — исеме лә юҡҡа түгелдер. Ун туғыҙынсы быуаттың 60-сы йылдарында Р.Г.Игнатьев, урындағы халыҡ ярҙамында, ҡоролма эргәһендәге ҡәбер ташында: «Бында хандың Сәхипъямал исемле ҡатыны ерләнгән», — тигән яҙыуҙы уҡый. Ысынында иһә тарих фәндәре кандидаты Һ.В.Йосопов таштағы яҙыуҙы: «Бында 1695 (1696) йылда башҡорт батыры Тәҡи ерләнгән», — тип тәржемә итә. Ләкин ул ҡәберҙә кем генә ятмаһын, Тура хан мавзолейы ла, Хөсәйенбәк кәшәнәһе лә боронғо башҡорттарҙың монументаль архитектура сәнғәте булып тора, тип раҫлай Барый Кәлимуллин. Башҡорттарҙың борондан уҡ архитектура сәнғәте менән шөғөлләнеүен иҫбатлап, ул былай тип яҙҙы: «Башҡорт халҡы тарихында архитектура-төҙөлөш эшмәкәрлеге XII быуат аҙаҡтары — XIII быуат баштарында барлыҡҡа килгән. Был осорҙа ырыу мөнәсәбәттәре тарҡалыуға бара. Халыҡ тормошоноң социаль-иҡтисади йәһәттән алға китеше башҡорт культураһында монументаль төҙөлөш сәнғәтен тыуҙырыуға юл аса ла инде. Әле һүрәтләнгән кәшәнәләр халыҡтың төҙөлөш эшмәкәрлегендә тәүге аҙым булғандыр.

Мавзолейҙарҙың монгол осоронда һалыныу мөмкинлегенә беҙ кире ҡарашта, сөнки Алтын Урҙа хандарының Башҡортостанда хакимлыҡ итеү дәүерендә уның етештереү көстәре һәм культураһы емерелә генә. Монгол-татарҙарҙың төҙөлөш эшмәкәрлегенә килгәндә, улар үҙҙәре баҫып алған илдәргә күҙгә ташланырлыҡ бер ниндәй ҙә ҡоролма һалмаған. Һалғандары ла Урта Азия илдәре оҫталары тарафынан башҡарылған. Монгол яуына тиклем үк Башҡортостанда мавзолейҙар төҙөү башҡорттарҙың сағыштырмаса юғары культураһы тураһында һөйләй. Монголдарҙың XIII быуаттың тәүге яртыһында Башҡортостанды баҫып алыуы башҡорт төҙөлөш сәнғәтен бер нисә йөҙ йылға туҡтата.

Башҡортостан биләмәләрендә архитектура ҡомартҡыларының бөгөнгәсә һаҡланыуы — башҡорттарҙың монументаль ҡоролмаларҙы төҙөүҙә ныҡлы иҙмәләрҙе әҙерләү серен, ташҡа яҙыу сәнғәтен яҡшы белеүенең асыҡ дәлиле. Улар иҡтисади һәм техник мөмкинлектәрҙән сығып, социаль талаптарға, урындағы тәбиғәт шарттарына һәм халыҡтың эстетик зауыҡтарына яуап бирерлек ҡоролмалар төҙөгән. Майҙаны менән әллә ни ҙур булмаған был архитектура ҡомартҡылары бөгөн дә тәрән һоҡланыу ҡатыш ғәжәпләнеү тойғоларын тыуҙырмай ҡалмай».

Барый Кәлимуллиндың «Башҡортостандың архитектура ҡомартҡылары» китабының өсөнсө өлөшө 1958 йылда сыға һәм дини ҡоролмаларға арнала. Миҫал итеп ул Өфөләге ике мәсетте, Балтас районының Иҫке Тушҡыр һәм Мәсетле районындағы Яңы Мөслим ауылдары мәсеттәрен ала. Мәсетте төҙөү башҡорт төҙөлөш сәнғәтенең үҫешкән һәм ҡыҙыҡлы тармағы һанала. Балта оҫталарының ҡулдары менән һалынған мәсеттәр халҡыбыҙҙың бай художество ижадының бер киҫәге генә. Башҡортостанда ғибәҙәтханалар төҙөү ислам динен ҡабул итеү менән бәйле. Улар тураһында Николай Рычков XVIII быуатта тәүләп яҙып ҡалдырған. Географ һәм этнограф П.С.Паллас экспедицияһының ағзаһы 1770 йылда Санкт-Петербургта нәшер ителгән «Капитан Рычковтың 1769 һәм 1770 йылдарҙа Рәсәй дәүләтенең төрлө провинциялары буйлап сәйәхәт журналы, йәғни көндәлек яҙмалары» тигән хеҙмәтендә, мәҫәлән, Ырымбур һәм Ҡазан губерналарын үткән саҡта һәр ауылда тип әйтерлек ғибәҙәт ҡылыу йорттарын күрҙем, ти.

Батша хөкүмәтенең 1736 йылдан мәсеттәр төҙөүҙе туҡтатыу, ә 1742 йылда булған мәсеттәрҙе емереү тураһында указдары сыҡһа ла, уларҙы һалыу үҙ яйына дауам иткән. Башҡортостандағы тәүге мәсеттәр ябай биналарҙан торған һәм ауыл өйҙәренән әллә ни айырылмаған.

Барый Кәлимуллиндың «Ғибәҙәт ҡылыу ҡоролмалары» тигән хеҙмәтендә Башҡортостандағы бөтә мәсеттәрҙең дә ағастан һалыныуы тураһында яҙыла. Улар ауылдың йөҙөн билдәләүҙә мөһим урын тотҡан. Мулла менән байҙар йорттары ауылдарҙың архитектура үҙәген тәшкил иткән. Ҙур ауылдарҙа ике, өс, хатта унан да күберәк мәсеттәр һалынған. Балтас районының Иҫке Тушҡыр ауылында өс, Асҡын районының Ҡубыяҙ ауылында биш мәсет булғанлығы билдәле. Мәсеттәр һанына ҡарап ауыл мәхәлләләргә бүленгән. Мәсеттәр ҙә мәхәллә кешеләре көсө менән һалынған.

Бөгөнгәсә (йәғни 1957 йылға тиклем. — **Р.Х.**) һаҡланған боронғо мәсеттәрҙең береһе — Иҫке Тушҡыр ауылында. Ҡарттарҙың һөйләүенсә, уға 300 йыл. Тура мөйөштәр яһап һалынған ике манаралы был мәсет башҡорт халыҡ төҙөлөш сәнғәтенең иң яҡшы өлгөләренә инә. Ауылдың ҡалҡыуыраҡ урынына һалынғанға, манараһы алыҫтан уҡ яҡшы күренә. Ҡар-ямғырҙан һаҡлау һәм оҙағыраҡ ултырһын өсөн, стеналары горизонталь таҡта менән көпләнгән һәм был мәсетте ауылдың башҡа өйҙәренән айырып, ҡупшылыҡ биреп тора. Көнсығыш һәм көнбайыш яҡтан ике метр ярым бейеклектә тура мөйөшлө туғыҙ тәҙрә ҡуйылған. Мәсеттең архитектураһы тотошлайы менән дә, айырым өлөштәре менән дә исеме есеменә тап килә. Унда бинаның идея-художество тәғәйенләнешенә яуап бирмәгән бер деталь дә юҡ, бөтәһе лә үҙ урынында.

Барый Кәлимуллин ерҙән сарҙаҡ ҡыуышлығына тиклем 4,6 метрға, манараһының ярым айына тиклем 7,14 метрға еткән мәсеттең тышҡы архитектураһы менән бер үк ваҡытта эске күренешен, конструкция-

ларын да ентекләп һүрәтләй, планын һыҙып ала, сөннәт һәм фарыз бүлмәләренең, ишек һәм тәҙрәләрҙең үлсәмдәрен күрһәтә лә, манараларына айырым туҡтала. Уларҙың береһе, ти ул, мосолмандарҙы намаҙға саҡырыу урыны булһа, икенсеһе мәсеткә матурлыҡ, мөһабәтлек, ғорурлыҡ биреү йәһәтенән ҡуйылған. Ике манара араһында ярым түңәрәк көмбәҙ ҙә булған, ләкин ул 1941 йылда ҡутарып алынған. Урта Азия, Египет, Сирия, Төркиә мәсеттәрендәге дүрт һәм унан да күберәк манараларҙан айырмалы рәүештә, Иҫке Турыштағы мәсет манаралары һигеҙ ҡырлы нигеҙгә ултыртылған конус формаһында. Урта Азияла, мәҫәлән, манаралар түңәрәк башня тибында, ғәрәп илдәрендә — дүрткел, Ираҡта конуслы манаралар киң таралған. Башҡортостан, Татарстан, Себер һәм Рәсәйҙең ҡайһы бер башҡа төбәктәрендә иһә әле әйтелгән һигеҙ ҡырлы манаралар таралған. Улар ябай ҙа, ныҡ та, еңел дә. Иҫке Турыш мәсете манараһының нигеҙе диаметр буйынса 1,6 метр ғына булыуға ҡарамаҫтан, ул ҡаҡшамаҫлыҡ, ел-ямғырға бирешмәҫлек итеп эшләнгән. 1891 йылға тиклем мәсеттең манараһы булмай. Уны ҡабаттан һалғанда төп өлөшө үҙгәртелмәй. Өҫтәмә рәүештә йылытылған алғы бүлмә һәм солан өсөн төкәтмә генә эшләнә, көмбәҙ һәм манаралар ҡуйыла, ҡыйығы алмаштырыла, тышҡы стеналар таҡта менән көпләнә, эске бүлмәләр штукатурлана. Хәҙер мәсеттең тышҡы архитектураһы байыраҡ, камилыраҡ күренә. Төҙөк манаралар, бейек ҡыйыҡ, текә фронтондар (ҡыйыҡ осо) мәсеткә яңы төҫ, асыҡ мәғәнә бирә. Ауыл ҡарттары, мәсетте реконструкциялау менән башҡорт балта оҫтаһы Кәлимулла Рәхмәтуллин етәкселек иткән, тип һөйләне. Ғөмүмән, Рәхмәтуллиндар быуындан-быуынға күсеүсе атаҡлы балта оҫталары икән. Ғаилә башлығы тирә-йүндә киң билдәле балта оҫтаһы булған, улдары Фәрхиулла менән Дәүләтгәрәй ҙә — танылған балта оҫталары. Кәлимулланы иһә Башҡортостанда ике манаралы мәсеттәрҙе тәүләп һалыусы оҫта тип беләләр.

Мәсетле районының үҙәге Оло Устьикиндан 12 саҡырым көнсығышта ятҡан Яңы Мөслим ауылындағы мәсет тә иғтибарға лайыҡ. Ул ауыл уртаһында башҡа өйҙәрҙән айырым ултыра. Тышҡы архитектураһы бик ябай: һигеҙ мөйөшлө ҡоролманың көньяҡ өлөшөндәге консолдәргә (йорттоң алға сығып торған өлөштәрен тотоу өсөн стенаға эшләнгән сығынты) михрап өсөн төкәтмә беркетелгән. Төньяҡтан дүрт мөйөшлө намаҙ уҡыу бүлмәһе бар. Йорттоң михрапҡа яҡын фасадында ябай йөҙләктәр менән рамға ултыртылған тәҙрәләр уйылған. Йөҙләктәр йәйәләге уҡты хәтерләтеүсе башҡорт орнаменты менән һырланған. Элегерәк мәсеттең бейек манараһы ла булған, ләкин ул совет власы йылдарында бысып алынған. Ике намаҙ залына ла көнсығышҡа һәм көнбайышҡа ҡараған тәҙрәләрҙән яҡтылыҡ төшә.

Иҙән таҡталары буятылмаған, ҡыйығы таҡта менән ябылған. Бина үҙе йыуан ҡарағас бүкәндәргә ултыртылған. Улар араһына урындағы яҫы таштар тултырылған. Быуындан-быуынға килгән мәғлүмәттәргә ҡарағанда, мәсет 1854 йылда янған мәсет урынына һалынған.

Күп мөйөшлө, йә түңәрәк яһап төҙөлгән дини ҡоролмалар Башҡортостанда осраҡлы хәл түгел. Улар ситтән инмәгән. Башҡорт тирмәһенә оҡшатып һалынған Яңы Мөслимдәге мәсет шуларҙың береһе генә.

Өфөнөң Туҡай урамындағы таш мәсетте лә Барый Кәлимуллин архитектура сәнғәте фәне күҙлегенән тасуирлап, һәр мөйөшөн ентекләп үлсәп, тикшереп яҙа. Манараһы менән бергә 29,9 метрға еткән ҡорол-

ма заманында ҡалалағы иң бейек йорттарҙан һаналған. Икенсе бейек бина — Троицк соборының бейеклеге 28,7 метр һәм ул таш мәсеттән 34 метр түбәнерәк һалынған. Мәсеттең тәүге бинаһы 1830 йылда төҙөлгән. Проект авторы билдәһеҙ. Мәсетте киңәйтеү проекты 1890 йылда инженер-архитектор Иван Мялов тарафынан башҡарыла. Яңы Күпер урамының Ағиҙелгә табан барып Туҡай урамына терәлгән осондағы ике ҡатлы таш мәсеттең тәүге ҡаты өс маршлы ике ағас баҫҡыс ҡуйылған вестибюль һәм ярҙамсы бүлмәләрҙән ғибәрәт. Икенсе ҡат бәләкәй һәм ҙур намаҙ залдарынан тора. Иҙәндәре бетон, уларға кейеҙ өҫтөнән балаҫ йәйелгән. Бина мейестәр менән йылытыла.

Ҡаланың көньяҡ-көнбайыш ситендәге ике ҡатлы ағас мәсет тә — архитектура ҡомартҡыһы. Уның намаҙ залы өҫтөндәге ҡыйыҡҡа ҡалай менән ябылған көмбәҙ ҡуйылған. Төньяҡтан таҡта солан, көньяҡтан михрап төкәтелгән. Ике ҡатта ла икешәр намаҙ залы, йылы вестибюль бар. Намаҙ залдарын бер генә мулла хеҙмәтләндерә. Уның тауышы икенсе ҡатҡа ла ишетелһен өсөн, ҙур залдың ҡат араһына намаҙ уҡыу нишаһы киңлегендә тишек ҡалдырылған. Беренсе ҡатта ирҙәр, икенсеһендә ҡатын-ҡыҙҙар намаҙ уҡый. Стеналары штукатурланмаған, түбәһе таҡта менән ябылған.

Өфөлә өсөнсө мәсет тә бар. Ике ҡатлы, ике манаралы таш мәсет Социалистик (хәҙер — Мостай Кәрим урамы) урамында 1907 йылда төҙөлөп бөтә. Төрлө диаметрҙағы цилиндрик формалы парлы манаралар Ырымбурҙағы Каруанһарай һәм Мейәс ҡалаһындағы мәсеттәргә лә хас.

«Каруанһарай» һүҙе сыҡҡас, халҡыбыҙҙың ошо изге ҡомартҡыһына ла туҡталып китмәй булмай. Уның тураһында Барый Кәлимуллин бына нимә тигән: «Петербургтағы Пулково обсерваторияһын, Ҡышҡы һарай майҙанындағы Генераль штабты проектлаған күренекле урыҫ архитекторы Александр Брюллов проекты буйынса башҡорттар аҡсаһына һәм башҡорттар көсө менән 1337—1844 йылдарҙа һалынған, 1846 йылда тантаналы шарттарҙа асылған Каруанһарайҙың планын һәм һүрәтләнешен, архивтарҙа оҙаҡ ҡына эҙләһәк тә, таба алманыҡ. Инде аҡрынлап емерелә башлаған, һәм уны туҡтатыу, ремонтлау, реконструкциялау өсөн урындағы властар бармаҡҡа бармаҡ та һуҡмағас, мин, исмаһам, һыҙмаһын булһа ла алып ҡалайым тип, бер ай буйы Ырымбурҙа яттым. Каруанһарайҙы арҡыры-буй, аҫтын-өҫтөн, эсен-тышын сантиметрлап үлсәп, ҡағыҙға күсерҙем, фотоға төшөрҙөм, уға ҡағылышлы архив фондтарын аҡтарҙым, төҙөлөү тарихын яҙҙым. Тик ҡағыҙ ҡағыҙ инде, ул да иҫкерә, туҙа, йыртыла. Шуға ла халҡыбыҙҙың әсе тир һәм ҡайнар ҡан түгеп төҙөлгән тарихи һәм архитектура ҡомартҡыһын бөтөнләй юҡҡа сығыуҙан, йылдар пәрҙәһе артында юғалып ҡалыуҙан нисек тә һаҡлау һәм килер быуындарға еткереү маҡсатында башҡорттарға, Башҡортостан хөкүмәте ҡарамағына бирергә ине лә бит, ләкин уға кем тотонор, кем башлап сығыш яһар икән?»

## Изге ине уның хыялы

Хәтеремдә, вафатынан ике йыл элек миңә Барый Ғибәт улы менән Өфө нефть институтының Менделеев урамындағы архитектура-төҙөлөш факультетының үҙе ойошторған архитектура кафедраһында тағы ла осрашып, башҡорт төҙөлөш сәнғәте, башҡорт архитектураһы, уның үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге тураһында оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырғайныҡ. Кеше

ҡартайған һайын ваҡлана, мыжыҡҡа әйләнә тиһәләр ҙә, тормоштоң әсеһен-сөсөһөн күргән ҡарт архитектор, Башҡортостан Архитекторҙар союзының беренсе рәйесе, сәнғәт докторы, профессор, СССР Төҙөлөш һәм архитектура академияһының башҡорттарҙан тәүге һәм берҙән-бер ағза-корреспонденты, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры, башҡорт һәм Башҡортостан архитектураһына арналған тиҫтәләгән китаптар авторы донъя ваҡлыҡтарынан күпкә юғары ине. Уны хәҙер бер генә проблема — башҡорт архитектураһының бөгөнгө торошо һәм киләсәге борсой, тәрән уйҙарға, шомға һала.

— Ваҡыт үтә, тормош үҙгәрә бара, — тигәйне ул, — тик бына беҙҙең ауыл, ҡалаларыбыҙҙың эске һәм тышҡы йөҙҙәрендә генә үҙгәреш һиҙелмәй. Типовой бер төрлөлөк, күрекһеҙлек, милли үҙенсәлекһеҙлек — Башҡортостан ҡала һәм ауылдарының йөҙөн бына ниндәй «төҙөлөш сәнғәте» билдәләй. Быға тиклем дә бит беҙҙе Мәскәү һәм Ленинград архитекторҙары «өйрәтеп» килде. Ҡалалар улар проекты менән һалынды. Хатта район үҙәктәре, эшселәр ҡасабаларына ла ҡул һуҙа башланылар. Урындағы рельеф, һауа шарттары, ландшафт, милли колорит бөтөнләйе менән һанға һуғылманы, урамдар бер-береһенән айырылманы, шырпы ҡаптары һымаҡ, төҫһеҙ, шаблон, трафаретҡа ҡоролған биналар, торлаҡ йорттар менән тулды. Хатта Мәскәү менән Ленинградтың йорттарын, урамдарын бер-береһенән айырыуы ауыр. Ул турала Эльдар Рязановтың «Ирония судьбы, или С легким паром» фильмында бик тапҡыр күрһәтелә.

Йәғни, бына Салауат ҡалаһын Рәсәйҙең теләһә ҡайһы өлкәһенә күсереп ҡуй, ул Рязань һәм Смоленск, Иркутск һәм Новосибирск, Пенза һәм Краснодар өлкәләрендә һуғыштан һуң һалынған ҡалаларҙан бер яғы менән дә айырылмаясаҡ. Ә бит Салауат — башҡорт ҡалаһы һәм унда милли үҙенсәлек тәүге урында торорға тейеш. Дөрөҫ, беҙ ҙә улар ауыҙына ғына ҡарап тик ятманыҡ. Салауатты планлаштырғанда үҙебеҙҙең фекерҙе, үҙ вариантыбыҙҙы үткәрергә ҡырталаштыҡ. Ваҡыты менән беҙҙең тәҡдимдәр ҡабул ителә лә ине, ләкин бөтөнләйе менән түгел.

Ә хәҙер, заман ауырлыҡтарын, көндәлек ығы-зығыларҙы, ереле-ваҡлы мәшәҡәттәрҙе, үҙ-ара низағтарҙы, мәскәүҙәргә үпкәләүҙәрҙе артҡа ташлап, милли архитектурабыҙҙың бөгөнгө торошона күҙ һирпеп алайыҡ та, Барый Кәлимуллин хыялдарының тормошҡа ашыуы-ашмауы тураһында уйлашайыҡ. Сөнки теге йәки был бина, торлаҡ йорт, ҡала, ҡасаба, биҫтәне һалып бөткәс, уны асҡанда иң тәүҙә төҙөүселәрҙе маҡтайҙар, ә архитекторҙар телгә алынһа — алына, алынмаһа — юҡ. Шундай бер яҙылмаған ғәҙәт, традиция ла бар: йылға аша күпер һалынғас, ныҡлығын, ышаныслығын һынау өсөн уның аҫтына төҙөүселәр менән бергә уны проектлаусы архитектор ҙа төшөп баҫа. Шулай килеп сыға: ҡайҙа маҡтау, тантана — унда тик төҙөүселәр генә, ә ҡайҙа хәүеф — унда архитектор. Ләкин, нисек кенә булмаһын, халыҡтарҙың һәм дәүләттәрҙең рухи һәм матди үҫешендә архитектура айырым урын тота. Теге йәки был халыҡтың рухи, иҡтисади, мәҙәни, хатта сәйәси тормошон сағылдырыусы, ил ҡеүәтен, тотороҡлолоғон күрһәтеүсе милли билдәләр, символдар атрибуттарын архитектура ҡоролмалары — кремлдәр, храмдар, мәсеттәр, сиркәүҙәр, сауҙа үҙәктәре, кәшәнәләр, һарайҙарҙан башҡа баһалау икеле. Улар бер-береһенә тығыҙ бәйләнеп үҫкән. Ҡалалар төҙөү, төҙөлөш сәнғәте һәр дәүерҙә лә мөһим дәүләт

эше тип ҡаралған. Заманында Афина, Рим, Сәмәрҡәнд, Бохара, Бағдад, Мәскәү, Киев, Ҡазан кеүек боронғо ҡалалар тулы бер эпоха, ваҡиғаларға исем-атама биргән, уларҙың йөҙөн билдәләгән. «Боронғо Рим тарихы», «Киев Русе», «Ҡазан ханлығы», «Мәскәү дәүләте» тип тикмәгә генә әйтмәгәндәрҙер бит. Күренекле рус яҙыусыһы Н.В.Гоголь: «Архитектурала — донъя йылъяҙмаһы. Тик ул йырҙар, ауыҙ-тел ижады ҡомартҡылары тынғас ҡына һөйләй башлай», — тип ана шул юғала барған архитектура сәнғәтен күҙ уңында тотҡандыр. Яҙыусының XIX быуатта уҡ әйтеп ҡалдырған донъя йылъяҙмаһы беҙгә бөгөн арты менән боролған һымаҡ. Сөнки башҡа илдәр үҙ архитектураһын камиллаштырыуға, архитектура сәнғәтендә, ҡалалар төҙөлөшөндә ыҡсымлыҡҡа, гүзәллеккә ынтылған бер ваҡытта беҙҙең Ватан архитектураһы, төҙөлөш сәнғәте бер урында тапана һымаҡ. Ул ғына ла түгел, әгәр үткән быуаттың 20—30 йылдарында, дин менән көрәшәбеҙ, тигән һыныҡ һылтау менән архитектура ҡомартҡылары — мәсеттәр, сиркәүҙәр, ғибәҙәтханалар, синагогалар, монастырҙар, храмдар емертелеүгә дусар ителһә, илленсе йылдарға «ни сәсһәң, шуны урырһың» тигәндәй, Рәсәй архитектураһы алдына, Гамлеттағыса, «булырғамы — булмаҫкамы?» дилеммаһы килеп баҫты. Храмдар һәм зауыҡ менән һалынған һарайҙар урынын региондарҙың милли үҙенсәлеге һанға һуғылмаған, кешеләр һаулығына һәм психикаһына кире йоғонто яһаған тимер-бетон конструкциялы һәм шаблонға ҡоролған проекттар менән «хрущевка»-лар, мәҙәниәт һарайҙары, административ һәм башҡа төр биналар яулай башланы. Был бер төрлөлөк беҙҙең республиканы ла урап үтмәне. Сөнки ҡала, ҡасаба, биҫтә, ауылдарыбыҙҙың төҙөлөш майҙансыҡтарында башҡорт архитектура сәнғәте һәм милли колориттың сағылышы бөтөнләй юҡ тип әйтерлек.

Халыҡ архитектураһы сәнғәтенең быуаттар төпкөлөнән килгән бай тарихи традициялары булыуға ҡарамаҫтан һәм беҙ төҙөлөш темптары буйынса Мәскәү һәм Мәскәү өлкәһенән ҡала өсөнсө урында барһаҡ та, архитектура һәм төҙөлөш сәнғәте менән әллә ни маҡтана алмайбыҙ.

Тәүге башҡорт һәм Башҡортостан архитекторы, архитектура сәнғәте буйынса Башҡортостанда беренсе фән докторы, СССР Төҙөлөш һәм архитектура академияһының ағза-корреспонденты, профессор Барый Ғибәт улы Кәлимуллиндың да исемен алтын хәрефтәр менән яҙыр, Ишембай һәм Өфө, Белорет һәм Стәрлетамаҡ урамдарына уның исемен ҡушыр инем. Сөнки халҡыбыҙҙың инде ваҡыттар үтеү менән юғала, юҡҡа сыға башлаған боронғо архитектура сәнғәтен, уның тарихи ҡомартҡыларын бүтән бер ҡасан да тарих туҙанына әйләндермәҫлек итеп халыҡҡа кире ҡайтарып биреүсе, Өфөлә, республикабыҙҙың башҡа ҡалалары һәм ауылдарында бик күп торлаҡ йорттар, йәмәғәт биналарының проект авторы уға ғына лайыҡтыр бит. Йәнә, уның Өфөлә айырым архитектура-төҙөлөш институты асыу, башҡорт архитектураһы мәктәбе булдырыу хыялын да онотоу килешмәйҙер.

Башҡорт архитектураһының башында юл ярып барған Барый Ғибәт улы Кәлимуллинды Башҡортостан архитектураһының классигы тип атарға тулы хаҡыбыҙ, хоҡуғыбыҙ булырға тейеш.